✓Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына! 15 – 30 майҙа "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡ менән яҙылып була: 50665 индекслы баҫмабыҙ ошо 15 көн арауығында алты айға 471 һум 72 тин, 50673 индекслыһы (юридик шәхестәр өсөн) 477 һум 72 тин тәшкил итәсәк. Июнгә ҡалдырмай, яратҡан баҫмағыҙға яҙылып ҡуйһағыҙ, оторһоғоҙ.

(Гәзиткә яҙылыуҙың башҡа юлдары тураһында 2-се биттә уҡығыҙ).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№21 (595)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Бала һөйөүгә нигеҙләнһә...
яҙмышың да, ғаиләң дә емерелмәҫ



6

Беҙҙең уҡыу йорто бераү генә,



8-9 йәғни Сибай институты студенттар күҙлегенән

Йәшәгән, ти, изгелек...

йәки "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы тураһында



11

Өлгөлө башҡорт ауылы...

Хыялда ғына түгел



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Китапханалар бөгөнгө көндә лә мәҙәни-ағартыу үҙәге ролен үтәйме?

***Тамара ТИМОФЕЕВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, матбуғат ветераны:*** Быltыр Матбуғат йортo ишеген асып инеп, "Башҡортостан" гәзитендә эшләй башлауыма һәм шунда уҡ уның китапханаһына барып, китап уҡыусы карточкаһы тултырыуыма теүәл алтмыш йыл тулды. Шунан бирле, хаҡлы ялға сығып, эштән китһәм дә китапхана юлын тапайым. Элек компьютер тигән нәмә булманы, әле булһа ла беҙ, өлкән быуын өсөн төп мәғлүмәт сығанағы ролен китапхана үтәй. Дөрөҫөрәге, китапхана - ул мәғлүмәт алыу урыны ғына түгел, әлбиттә. Күберәк белергә, уҡырға тырышҡан кешеләр өсөн рухи даирәне байытыу урыны ла, донъянды онотторор мөғжизә иленә сәйәхәт тә, иң һуңғы яңылыҡтар ҙа ул китапхана. Тәүҙәрәк, редакцияла өлкән корректор булып эшләгән сакта мин унда күберәк эш буйынса төрлө һүҙлектәр, белешмә материалдар эҙләп, донъя атласынан географик атамаларҙың дөрөҫ яҙылышын ҡарап белер өсөн йөрөй торған булһам, аҙаҡ төрлө китаптар, гәзит һәм журналдар алып уҡый башланым һәм әлеге көнгәсә улар ҙан айырыла алмайым - был шөғөл минең эске бер ихтыяжға, күңел талабына әүерелде. Ҡасандыр уҡылған әҫәрҙәрҙе, бигерәк тә рус классиктарын, үҙебеҙҙең башҡорт яҙыусылары китаптарын әлеге йәш күҙлегенән ҡабатлап уҡырға яратам. Мәҫәлән, Антон Чехов әҫәрҙәре бер ваҡытта ла ялҡытмай. Уның әҫәрҙәренең идея-тематикаһы бөгөнгө көндә лә бик актуаль. Уҡыған һайын үҙем өсөн элек иғтибар итмәгән йә аңлашылып етмәгән кинәйәләрҙе асып, ҡыуанам. Чехов йәшәйешебеҙҙә урын алған бөтөн һорауҙарға ла яуап бирә алған, тигән фекерҙәмен, сөнки ул ябай ғына кешеләр образы аша дөйөм кешелек ҡиммәттәрен күрһәтә белеүе менән һоҡландыра. Башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрен, республикабыҙҙа нәшер ителеүсе һәм ҡайһы бер үҙәк гәзит-журналдарҙы ла ҡарап барырға тырышам. Даими рәүештә китап һәм матбуғат баҫмалары уҡыу, яңыраҡ бер рәсми медицина сығанағынан уҡып белеүемсә, мейене иртә ҡартайыуҙан аралай, тимәк, ғүмер оҙайлығына булышлыҡ итә, имеш. Был фаразда дөрөҫлөк барҙыр, моғайын, тимен, сөнки, ысынлап та, олоғая барған хәлдә лә донъяға, әйләнә-тирәндәге хәл-ваҡиғаларға, белемгә, яңылыҡҡа ҡыҙыҡһыныу хисе һүрелмәй икән, тимәк, һин тере. Бөтөн нәмәгә ҡул һелтәп, битарафҡа әйләнеүҙән, "үлек йән" булып көн итеүҙән ҡотолоу юлы тап ана шул китапханала, тип уйлайым. Пенсионерҙарҙың, "БАМ-дан ҡайтып киләм", тип бер-береһен мәрәкәләүҙәре хаҡындағы көләмәсте иҫләгеҙ әле (больница - аптека - магазин). "Больница" һүҙен мин бөгөндән "Библиотека" һүҙе менән алмаштырырға тәҡдим итер инем!

***Нәзирә КӘРИМОВА, Ейәнсура районы китапханалар селтәре директоры:*** Күптәр китапханаларҙы китап һаҡлау һәм китап биреү урыны итеп кенә ҡарай. Әммә һуңғы йылдарҙа уның башҡарған эштәре һәм бурыстары шул тиклем ҙурайҙы һәм киңәйҙе, хатта төп бурыстар, ниндәйҙер кимәлдә, артҡараҡ шылған кеүек. Бөгөнгө көндә китапханалар һәр аҙым һайын үҙҙәренең барлығын, кәрәклеген раҫлай, һәм заман менән бергә атларға, китапханаға килеүселәрҙең талаптарына яраҡлашырға тырыша. Китапханаға йөрөүселәр һанын арттырыу өсөн бик күп төрлө берләшмәләр, клубтар эшләй. Һөҙөмтәлә, ауылдың рухлы, зыялы, белемле кешеләрен берләштергән урын - ул китапхана. Һәм бөгөн китапхана, мәҙәни-ағартыу үҙәге булараҡ, үҙенең иң юғары кимәленә күтәрелде, тип әйтергә була. Сөнки ул - ауыл халҡының аралашыу үҙәге. Кеше бында күңеленә аҙыҡ алырға килә. Ә китапханасы китап бирә, мәҙәни саралар ойоштора, һайлауҙарҙы үткәрешә, ижтимағи тормошта ҡайнай, урамдарҙы йыйыштыра, үҙенең эш урынын гөл-бағса итеп тота, китаптар һата, килгән кешеләрҙең хәсрәттәрен уртаҡлаша һәм ... ошо эше булғанға ҡыуана.

Үрҙә әйтелгәндәр Ейәнсура китапханасылары тураһында. Бында, һайлап алынған һымаҡ, үҙ эшен яратҡан, ваҡыт менән иҫәпләшмәгән, матди байлыҡҡа ҡарағанда рухи байлыҡты өҫтөн ҡуйған, ижади фекерләгән хеҙмәткәрҙәр эшләй. Райондың бер мәҙәни сараһы ла уларһыҙ үтмәй. Республика кимәлендәге бәйгеләрҙә лә үҙ йөҙөбөҙ, оло еңеүҙәребеҙ бар. Икенсе йыл рәттән район китапханасылары төрлө күрһәтмә саралар үткәреүҙә ярыша. Беҙҙең район китапханасыларына ғына хас тағы бер эш бар - ул халыҡ араһында китап һатыу. Сөнки әлеге ваҡытта районда был эш менән даими рәүештә бер кем дә шөғөлләнмәй. Кешеләр һорауы буйынса Өфөнән китаптар алып ҡайтып, уларҙы халыҡ араһында һатыу ойоштороу менән беҙҙә махсус хеҙмәткәр шөғөлләнә.

(Дауамы 2-се биттә).

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# РУХИ АҘЫҒЫБЫҘ

**Беҙҙең Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡытыусылары һәм уҡыусылары "Киске Өфө" гәзитен сыға башлағандан алып яратып уҡый. Уның биттәрендә донъя күргән тел, тарих тураһындағы мәҡәләләрҙе айырыуса көтөп алабыҙ. Ул - беҙҙең рухи аҙығыбыҙ.**



✓ *Китапханалар мәҙәни-ағартыуы үҙәктәре ролен үтәйме, тигән һорауға миҫал итеп театрлаштырылған шоу рәүешендә үткәрелгән "Китапхана төнө" сараһы тураһында әйтеп китер инем.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Китапханалар бөгөнгө көндә лә мәҙәни-ағартыу үҙәге ролен үтәйме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Айгөл БУРАНҒОЛОВА, Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге БР Милли китапханаһының башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире:***
Беҙҙең бүлек Башҡортостан халыҡтары әҙәбиәте, мәҙәниәте, тарихы, тел ғилеме, этнографияһы һәм топонимикаһы тураһындағы башҡорт, рус, татар телдәрендә китаптар менән тулыландырылған. Төп уҡыусыларыбыҙ - нигеҙҙә юғары уҡыу йорттарының филология һәм тарих факультеттары студенттары. Улар күберәк тел һәм әҙәбиәт ғилеме, нәфис әҙәбиәт, тарихҡа ҡағылышлы материалдар һорап мөрәжәғәт итә. Китапхана эшендә төп бурыстарҙың береһе булып ошо учреждение фондын әҙәбиәт менән тулыландырыу, уны тейешле шарттарҙа һаҡлау булһа, шул уҡ ваҡытта китап уҡыусыларҙы сифатлы итеп хеҙмәтләндереү һәм улар менән һәр төрлө ойоштороу саралары үткәреү ҙә күҙ уңында тотола. Ошо маҡсаттарҙан сығып, беҙҙең бүлек хеҙмәткәрҙәре тарафынан Башҡортостаныбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре, билдәле ғалимдар, яҙыусыларҙың яңы китаптары, монографиялары, башҡа төрлө хеҙмәттәре менән китап уҡыусыны даими таныштырып барыу күркәм бер ғәҙәткә әйләнде. Бынан тыш, әҙәби, әҙәби-музыкаль һәм хәтер кисәләре ойоштороу, яңы китаптарҙың исем туйҙарын үткәреү ҙа авторҙар менән китап һөйөүселәргә яҡындан аралашырға булышлыҡ итә. Республика күләмендәге күпселек саралар беҙҙең ҡатнашлыҡтан тыш үтмәй, тип әйтергә була. Мәҫәлән, июнь баштарында беҙ башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуға арнап, Рәсәй һәм сит ил ғалимдары ҡатнашлығында үтәсәк халыҡ-ара форумға әҙерләнәбеҙ. Китапханалар мәҙәни-ағартыу үҙәктәре ролен үтәйме, тигән һорауға миҫал итеп мин тағы ла беҙҙең системала быйыл өсөнсө тапҡыр театрлаштырылған шоу рәүешендә үткәрелгән "Китапхана төнө" сараһы тураһында әйтеп китер инем. Ул айырыуса йәштәр тарафынан ихлас ҡабул ителде. Быйыл ошо акцияла ете йөҙгә яҡын кеше ҡатнашты. Милли китапхана хеҙмәттәре менән файҙаланыусылар даирәһен бермә-бер киңәйтеүгә булышлыҡ итәсәк тағы бер яңылыҡ - ул электрон китапхана проектын тормошҡа ашырыу. Беҙҙең башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге хеҙмәткәрҙәре лә ошо электрон китапхананы тулыландырыуға үҙ өлөшөн индерә. Бүлектә шулай уҡ йыл буйы эшләп килгән ҡыҙыҡлы бер акция тураһында ла әйтеп киткем килә: беҙ башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәре араһында иң әүҙем китап уҡыусыларҙы асыҡлап, уларға бүлектең почетлы китап уҡыусылары тигән таныҡлыҡ тапшыра киләбеҙ. Әлеге көндә бындай ихтирамға яҙыусылар Ҡәҙим Аралбаев менән Ирек Кинйәбулатов һәм билдәле йырсы Радик Динәхмәтовтар лайыҡ булды. Әйҙәгеҙ, дуҫтар, беҙгә юлды һыуытмағыҙ - мәҙәнилек, уҡымышлылыҡ буйынса тағы ла кемдәрҙе айырып атарға мөмкин икән - зыялыларыбыҙҙы барлайыҡ!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# РУХИ АҘЫҒЫБЫҘ

**(Башы 1-се биттә).**

Уҡытыусыларыбыҙ дәрестәрендә лә, төрлө конкурстарға әҙерләнгәндә лә мотлаҡ ошо баҫма материалдарын файҙалана. Төрлө олимпиада, конкурс, ғилми эштәр яҙғанда уҡыусыларға ла ярҙамға килә "Киске Өфө". Ғөмүмән, ундағы тарихыбыҙ, туған телебеҙ, мәҙәниәтебеҙгә арналған мәҡәләләр алыштырғыһыҙ бер рухи һәм мәғлүмәти сығанаҡ булып тора беҙҙең өсөн.

Шәхсән үҙемә гәзиттең тәүге битендәге "Әйт, тиһәгеҙ...", аҙаҡҡы биттәге "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикалары танһыҡ. Гәзитте ҡулыма алғас та, ошо биттәрҙәге мәҡәләргә күҙ йүгертеп сығыуҙы ғәҙәт иткәнмен. Артабан өсөнсө биттә баҫылған сәйәсәткә байҡау яһайым. Ғөмүмән, сыға башлағандан алып бөгөнгө көнгә тиклем гәзит үҙенең үткерлеген юғалтмай, әленән-әле яңы темалар күтәрә, рубрикаларын яңырта. Уның кимәле һәр саҡ юғары. Әле яңыраҡ урта биттә Рәүеф Әлмөхәмәтов менән Әхтәр Боҫҡонов ҡатнашлығында үткән "Диалог"ты ҡыҙыҡһынып уҡып ултырҙым. Беҙҙең мәғариф өлкәһе өсөн актуаль теманы күтәрәләр. Гәзиттең тағы бер үҙенсәлеге: мәҡәләләрҙә ишара, кинәйәләргә ғәйәт ҙур урын бирелә, "Әйҙә, һығымтаһын үҙең тағат", тигәндәй, фекер йомғағының осон үҙеңә сисергә ҡалдыра. Ғәҙәттә, ошондай һығымталарҙы, башымда килеп тыуған фекерҙәрҙе мин йәһәт кенә телефоныма яҙып барам. Беҙҙең гимназия уҡытыусылары ла шулай итә.

**Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ,
Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры урынбаҫары.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Беләбеҙ, Рәсәй почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡын саманан тыш юғары күтәреп ебәреүе беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерҙе. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары, аңлы уҡыусыларыбыҙ был ауырлыҡты ла аңлап ҡабул итер, тип ышанып ҡалабыҙ.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - **246 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум**.

• **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.



• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Майҙа 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• Мартта 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән Баймаҡ районы 1-се Төркмән ауылынан В. Ишморатова, Мәләүез районы Смаҡ ауылынан Р. Камалетдинова - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**;

Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан Гөлдәр Шафиҡова, Салауат ҡалаһынан Сәүиә Бикмөхәмәтова - **"История башкирского народа"**;

Саҡмағош районы Саҡмағош ауылынан Мурзаяна Ғүмәрова, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан К. Насирова, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Р. Солтанғолова, Учалы районы Муса ауылынан С. Фәхретдинова, Әбйәлил районы Елембәт ауылынан В. Мәғәфүрова -**Мәрйәм Бураҡаеваның "Көҙгө ысыҡ"**;

Белорет районы Ассы ауылынан З. Байегетова, Межгорье ҡалаһынан Фәнүзә Әҡсәнова, Ғафури районы Ибраһим ауылынан Х. Ғәлиуллин, Ташбүкән ауылынан Рәшиҙә Таһирова, Өфө ҡалаһынан Рәшиҙә Ғәйнуллина, Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылынан Р. Илбулов, Миңнехәт Иҙелбаев, Шүлкә ауылынан Юламан Раев, Мәләүез ҡалаһынын Рауза Хазиева, Хәйбулла районы Мәмбәт ауылынан Марат Мәмбәтов - **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ булды.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ҡытайға рәсми сәфәр ҡылды. Сәфәр барышында республика башлығы Ҡытай Халыҡ Республикаһы бизнесы һәм бер төркөм Ҡытай территорияһы етәкселәре менән рәсми бәйләнештәр булдырҙы, хеҙмәттәшлек перспективалары, инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу буйынса уртаҡ эшмәкәрлек механизмдары буйынса фекер алышты.

✓Шанхайҙа Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән Ҡытайҙың Цзянси провинцияһы Губернаторы Лу Синьшенның осрашыуы уҙҙы, тип хәбәр иттеләр республика башлығының матбуғат хеҙмәтенән. Осрашыу Башҡортостан менән Цзянси провинцияһы араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм гуманитар өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек тураһындағы хөкүмәт-ара Килешеүгә ҡул ҡуйыу йомғаҡтары буйынса үтте. Документ Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Ҡытайға рәсми сәфәре сиктәрендә рәсмиләштерелде.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ҡытайҙың Ляонин провинцияһында "Хайчен Нефтемаш" корпорацияһына ингән "Ляонин Нефтемаш" предприятиеһында булды. Сәфәр барышында Башҡортостан Хөкүмәте менән Ҡытайҙың "Ляонин Нефтемаш" компанияһы араһында ниәттәр тураһында протоколға ҡул ҡуйылды. Протоколды Рөстәм Хәмитов менән "Хайчен Нефтемаш" корпорацияһының Директорҙар советы рәйесе Ван Чжэнжуандың ҡултамғалары нығытты. Протокол Башҡортостан территорияһында нефть быраулау өсөн ауыр ҡорамалдар етештереү буйынса Рәсәй-Ҡытай машиналар эшләү предприятиеһын төҙөүҙе күҙаллай.

✓27 майҙан алып 30-на тиклем Өфөлә беренсе "Йәштәрҙең наркотикҡа ҡаршы волонтерҙар форумы" үтәсәк. Унда Рәсәйҙең 24 ҡала вәкилдәренең ҡатнашыуы көтөлә. Мәскәү, Түбәнге Новгород, Һамар, Ырымбур, Белогорск, Воронеж - былар һәм РФ башҡа миллионлы ҡалаларынан 70-тән ашыу кеше йәштәр сәйәсәте өлкәһендә иң көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшерәсәк. Форум сиктәрендә төп ваҡиға ғилми-ғәмәли конференция буласаҡ, унда халыҡ-ара телекүпер һәм "Стопнаркотик" Бөтә Рәсәй ижтимағи хәрәкәттең төбәк бүлексәһен асыу ойоштороласаҡ.

## ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Бына тағы ваҡытлы матбуғат баҫмаларына яҙылыу мәле бара. Почта хеҙмәттәренә хаҡ бик ныҡ артып китеү сәбәпле, был кампания быйыл бик көсөргәнешле үтә һымаҡ. Хәйер, башҡорт баҫмаларына яҙылыу һуңғы йылдарҙа, ғөмүмән, ауыр бара. Ошо осор етһә, "Милли баҫмаларға беҙ яҙылмаһаҡ, кем яҙылыр?" тип, гәзит-журнал, радио-телевидение аша уҡыусылар намыҫына төбәп, мөрәжәғәт-сығыштар яңғырай башлай. Эйе, бындай мөрәжәғәттәр ҙә кәрәк, ләкин гәзит уҡыусыға үтенеп йә бер аҙ тәнҡитләп өндәшер алдынан таяҡтың ике осло булыуын да иҫтә тотоу мөһим. Уның бер осонда уҡыусылар торһа, икенсеһендә - ваҡытлы матбуғатта эшләүселәр, йәғни журналистар. Уҡыусыны күпме генә манҡортлоҡта ғәйепләһәң дә, ул, әлбиттә, үҙенә ҡыҙыҡ булмаған баҫмаға яҙылмаясаҡ.**

# УҠЫУСЫЛАРҘЫ ЯҠЛАП...



## йәки Баҫмалар тураһында бер кәлимә һүҙ

Былтыр матбуғатҡа яҙылыу осоронда мин "Киске Өфө"лә гәзиттәрҙең йөкмәткеһенә ҡағылышлы "Мәғлүмәт эҙләргәме, әллә фекерме?" тигән мәҡәлә баҫтырғайным. Берәй фекер алышыу килеп сыҡмаҫмы, тип өмөт иткәйнем, ләкин гәзиткә яҙыусылар булманы, әммә үҙем менән һөйләшкән кешеләр ҡағыҙ баҫмалар биттәрендә күберәк фекер табырға теләүен белдерҙе. Ысынлап та, бөгөнгө заманда, күпме генә тырышһалар ҙа, гәзиттәребеҙ мәғлүмәт еткереүсе роленә дәғүә итә алмай, сөнки телевидение, интернет һәр яңылыҡты кешеләргә сәғәте-минуты менән килтереп еткереп тора. Гәзиттәр аша берике, ҡайһы саҡта аҙна-ун көн үткәс килеп еткән хәбәрҙәрҙең бер кәрәге лә юҡ. Халыҡ уларҙан ана шул булып ятҡан хәлдәргә ҡарата ҡыҙыҡлы фекер, дөрөҫ баһа, үткер һүҙ көтә. Бер нисә йыл элек "Киске Өфө"нөң 3-сө битендә "Аҙна шаңдауы" тигән рубрика булып, Таһир Ишкинин тигән журналист көнүҙәк ваҡиғаларға, киҫкен мәсьәләләргә ҡарата аналитик материалдар биреп бара ине. Ә бит халыҡ уларҙы яратып уҡыны, хатта теге йәки был күренешкә үҙ ҡарашын булдырырҙан алда ҡайһы берәүҙәр "Тороп тор, Таһир был турала нимә яҙыр икән?" тип, журналист фекерен көтәүелләй торғайны. Бына ошоноң ише мәҡәләләр етмәй беҙҙең гәзиттәргә. Хәбәрселәр һаман, элеккесә, тормошта барған хәл-ваҡиғалар тураһында мәғлүмәт яҙыу, теге йәки был саралар тураһында эҙмә-эҙлекле репортаждар яһау менән шөғөлләнә. Үҙ һүҙе, үҙ ҡарашы, үҙ фекере булған журналисты уҡыусы шунда уҡ күҙенә "эләктерергә" тора, һәр һандан уның мәҡәләләрен эҙләй башлай, кинәнеп уҡый һәм уйлана. Мин ҡасандыр үҙебеҙҙең район гәзитенә Нияз Алсынбаев (хәҙер билдәле радиожурналист) эшкә килгәс, "Осҡон"доң һәр һанын түҙемһеҙлек менән көтөп алып уҡый торғайным. Бына шундай уйландырырлыҡ, көтөп алып уҡырлыҡ мәҡәләләр яҙған ҡәләм оҫталары аҙ беҙҙең матбуғат баҫмаларында. Күптәр редакцияла көн үткәрә лә, яҙа-йоҙа сыймаҡлаған мәҡәлә ишаратын мөхәррир өҫтәленә һелтәп, таҙа намыҫ менән ҡайтып китә. Гәзиттәр шул уҡымһыҙ яҙмалар менән сыға ла сыға. Кешенең, әлбиттә, ундай баҫманы алдырғыһы килмәй. Шунан китә инде милли матбуғаттың яҙмышын "ҡайғыртмаған" манҡорттарҙы тәнҡитләүҙәр!

Бер танышым үҙҙәренең район гәзитенә яңы мөхәррир тәғәйенләнгәс, барыһының да уның ҡайҙан килеүе тураһында ҡыҙыҡһына башлауы тураһында һөйләгәйне. "Һуң быға тиклем ун йыл самаһы хәбәрсе булып эшләне бит район гәзите редакцияһында..." тиһәк, "Аһ-аһ, ишеткән булманысы..." тип аптыраштылар, тине. Ун йыл буйы исеме гәзиттә сығып та, халыҡ өсөн билдәһеҙ булғас, уның яҙғандарынан ниндәй фәтеүә булды икән? "Мин һеҙҙең яҙғандарҙы уҡырға яратам", тигән һүҙҙәрҙе ишетмәгән гәзитсегә редакциянан тиҙерәк ҡасырға кәрәк, тип уйлайым. Сөнки нәҡ ошондай хәсрәт хәбәрселәр милли матбуғатты һәләкәт алдына ҡуя, ә яҙылыусылар түгел!

Бер саҡ беҙҙең район ауылдары буйлап бер яңы мөхәррир халыҡ менән осрашып йөрөгәйне. Ул үҙенең баҫмаһын бер башҡорт ғаиләһе лә унһыҙ йәшәй алмаҫ кимәлгә еткерергә теләүен һөйләне. Ләкин улай килеп сыҡманы. Шулай булыры билдәле ине лә инде. Иҫ киткес баҫма эшләр өсөн талантлы хәбәрселәр коллективы тупларға кәрәк ине бит. Ошоға тиклем уҡымһыҙ баҫма эшләп ултырған кешеләр яңы мөхәррир килде тип кенә үҙгәреп китә, үҙ кимәленән артыҡ һикерә алмай ҙаһа. Әлбиттә, мөхәррирҙән дә күп нәмә тора. Уның дипломатияһынан, талапсанлығынан, шәхси өлгөһөнән. Ә беҙҙә күп мөхәррирҙәр үҙҙәре яҙышмай ҙа. "Мин яҙырға тейеш тә түгел", тигәйне миңә берәүһе. Бәлки, шулайҙыр, әммә мөхәррире "күренеп" тормаған баҫма әсәйһеҙ йорт, етем бала кеүек. Уҡыусылар мөхәррире үҙе менән даими бәйләнештә булған гәзит-журналдарҙы яҡыныраҡ күрә.

"Меҫкен гусар хаҡында бер йылы һүҙ әйтегеҙ" тигәндәй, минең был мәҡәләм дә милли матбуғатты уҡырға теләмәгән милләттәштәремде бер аҙ яҡлау теләгенән сығып яҙылды. Гәзит уҡыусылар - ҡулланыусылар ғына бит. Етештереүселәре - гәзитселәр. Минеңсә, иң тәүҙә улар, ихтыяж булһын өсөн, сифатлы, матур, үтемле тауар тәҡдим итеү хаҡында уйланырға тейеш...

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫНА ҠОЛАҠ ҺАЛЫП...

## хаталар өҫтөндә эш эшләйек

**Венер ЙЫЛҠЫБАЕВ, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының башҡорт музыкаһы факультеты деканы:** Башҡорттар иҫ иткес ижади халыҡ. Улар һәр быуатта тарихи ваҡиғаларға, хәлдәргә ҡарата мөнәсәбәтен, фекер-ҡарашын үҙенең ауыҙ-тел ижадында, йырҙарында, башҡа жанрҙағы көй-моңдарында сағылдыра килгән. Шул йырҙарға байҡау яһаһаҡ, башҡорттарҙың Аҡ батшаға барып, Рус дәүләтенә нисек ҡушылыуы ла, ихтилалдар осоро, кантонлыҡ системаһы, 1812 йылғы Ватан һуғышы, Башҡортостандың үҙаллылыҡ яулаған мәле, халыҡтың ижтимағи-сәйәси хәле лә ап-асыҡ күренә. Халыҡ йырҙарында ата-бабаларыбыҙҙың илен, ерен йәнен аямай яҡлауы, һаҡлауы ярылып ята. "Урал", "Башҡорт ере", "Йәмәлекәй тау", "Сәҙе буйы", "Тәфтиләү", "Ҡараһаҡал", "Шарлы урман" йырҙары аша шанлы ла, данлы ла тарихыбыҙ күҙ алдына баҫа. Халыҡ үҙенең социаль хәле тураһында ла байтаҡ йырҙар ижад иткән. Социаль ғәҙелһеҙлеккә бағышланған "Мал табар", "Ярлы", "Ваба", "Хөсәйен", "Ялсығол", "Әхмәтсафа" йырҙары ла беҙҙе уйландырырға тейеш. Бөгөн ауылдарҙа йәшәүсе милләттәштәрҙең дә хәле шәптән түгел, ҡайһылары яҡшы тормошҡа өмөтөн өҙгән, ышанысын юғалтҡан, эшһеҙлектән Себер яҡтарына китеп, бил бөгә. Бындай халҡыбыҙҙың бөлгөнлөккә төшөү ваҡиғалары элек тә булған, халыҡ йырҙары текстарында һүрәтләнгән - уларҙан беҙгә фәһем алырға, уйланырға ғына ҡала. Билдәле рус музыканты Лев Лебединский үҙенең "Башҡорт халыҡ йырҙары һәм көй-моңдары" тигән китабында Мәжит Бранғоловтан яҙып алған "Мал" йырының тексын баҫтыра, китаптың артында уға шундай аңлатма бирә: "Халыҡ был йырҙы шул тиклем әсенеп башҡара. Мал - халыҡтың бөтә байлығын һынландыра, әгәр ҙә уны ҡулынан ысҡындырһа, башҡорт халҡының көй-моңдары һәм сәскәләре генә тороп ҡаласаҡ", - ти ул. Был текстағы мал бөгөн ерҙәребеҙҙе, урмандарыбыҙҙы һынландыра булыр. Эйе, еребеҙҙән яҙһаҡ, йәнебеҙҙән, рухыбыҙҙан да яҙасаҡбыҙ. Ә бит ата-бабаларыбыҙ ниндәй генә ауырлыҡтар, ғәҙелһеҙлектәр кисергәндә лә бөгөлөп төшмәй, баҫылмай, йәнен аямай көрәшеп, йәш быуынды ҡайғыртып, ер-һыуын ошо көндәргә тиклем һаҡлап алып килеп еткергән. Артабан ошо бурысты беҙ үҙ иңдәребеҙгә алырға тейешбеҙ ҙәһә. Әлеге көндә ерҙәребеҙ һатыла, урмандарыбыҙ сит-яттарға оҙайлы осорға ҡуртымға бирелә, шәхси милек рәүешендә кәртәләп алынып, дөйөм башҡорт халҡы мәнфәғәттәрендә файҙаланылмай икән, тимәк, беҙ хаталар өҫтөндә эш эшләмәгәнбеҙ килеп сыға. Шуға күрә, халыҡ йырҙарында сағылыш тапҡан ваҡиғаларҙан фәһем алып, бер тырмаға ҡабат баҫмаҫҡа тырышайыҡ, милләттәштәр!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда республиканың традицион дини берләшмәләре араһында хеҙмәттәшлек тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйылды. Документты төбәктең йәһүд, православие һәм мосолман үҙәктәре етәкселәренең ҡултамғалары нығытты. Килешеүгә "Диндәрҙең аралашыуы - милли берҙәмлек нигеҙе" Республика йәштәр слеты сиктәрендә өлгәшелде.

✓ Башҡортостанда балаларҙың йәйге ялын һәм сәләмәтләндереүен ойоштороуға 1,5 миллиард һумдан ашыу аҡса тотоноласаҡ. 2830-лаған ял һәм сәләмәтләндереү учреждениеһы асыу планлаштырыла. Уларҙың 95-е - ҡала ситендә, 37-һе - санаторий-профилакторийҙар, 120-һе - палаткалағы лагерҙар, 1500-ө - белем биреү учреждениеларында көндөҙгө лагерҙар, 1080-е - хеҙмәт һәм ял лагерҙары, хеҙмәт берләшмәләре. Бынан тыш, 450 самаһы профилле лагерь эшләйәсәк. Республиканың 3250 балаһы Ҡара диңгеҙ буйына, 250-һе (тел төркөмдәре) сит илдәргә, БДБ илдәренә барырға планлаштыра.

✓ Төрки йәштәре араһында "Урал моңо - 2014" Халыҡ-ара конкурс-фестивале Өфөлә 28-30 майҙа үтәсәк. Быйыл фестивалгә Төркиә, Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Гагаузиянан (Молдова), Рәсәйҙең 17 төбәгенән 50-нән ашыу башҡарыусы һәм ижади коллектив киләсәк. Фестиваль 28 майҙа Башҡорт дәүләт филармонияһында асыласаҡ, гала-концерт 30 майҙа Салауат Юлаев майҙанында үтәсәк. Фестивалде тантаналы япҡандан һуң концерт программаһы менән "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө сығыш яһаясаҡ. Был сығыш күсмә этно-фольклор шоу проектының презентацияһына әйләнәсәк, ул 2013 йылда Башҡортостан Республикаһы Президенты гранты конкурсында еңде.

✓ Өфөлә, Ағиҙелдә, Благовещенда, Нефтекамала, Салауатта, Сибайҙа, Стәрлетамаҡта, шулай уҡ Башҡортостандың Балтас һәм Ҡалтасы райондарында граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәре үҫешенең иң сикке индексы 2014 йылдың 1 июленән алып 112 процент кимәлендә билдәләнгән, ҡалған райондарҙа - 106 процент. Рәсәй Федерацияһының айырым субъекттары буйынса торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре өсөн түләүҙәр индексының үҙгәреше РФ Хөкүмәтенең 30 апрелендәге Бойороғо менән раҫланған.

**"Башинформ"дан.**

ШАНДАУ

# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫ

## Кире һәм ыңғай яҡтары



**Берҙәм дәүләт имтихандарының ҡыҫҡартылған "БДИ" тигән вариантын башҡортсалап "Барлыҡ дәүләт интернетта" тип нарыҡлап та ҡуйҙылар. Шулай инде, беҙҙә берәй яңылыҡ индерәләр ҙә, "Яҡшы булыр тип уйлағайныҡ, һәр ваҡыттағыса килде лә сыҡты", тип уфтанырға ғәҙәтләнгәндәр бит...**

Һуңғы осорҙа БДИ тапшырыу пункттарында видеокүҙәтеү системалары ҡуйыласаҡ, металл эҙләүсе приборҙар ҡулланыласаҡ, тигән хәбәрҙәр менән донъя тулды. "Киске Өфө"нөң үткән һанында Фәүзиә Иҙелбаеваның был сараларға ҡарата кире фекерен белдергән яҙмаһы баҫылып сыҡты. Был мәҡәләне уҡығас, БДИның тәүге "тәжрибә ҡуяндары" булған уҡыусыларымды иҫкә төшөрҙөм. Тәүҙә эксперимент рәүешендә генә булған БДИ-ны тапшырып, "иң тәүге ҡоймаҡ"тың төйөрҙәрен татып ҡарау тап улар өлөшөнә төшкәйне. 5-сенән бирле үҙ балаларым кеүек яҡлап-курсалап йөрөткән уҡыусыларымды беренсе тапҡыр БДИ-ға һуғышҡа оҙатҡандай оҙатып ҡалғайным...

Ә инде улар ғүмерҙәрендә тәүге тапҡыр тиерлек шундай стресс кисереп, туған мәктәптәренә кире әйләнеп ҡайтҡанда, күптәренә ысын мәғәнәһендә медицина ярҙамынан тыш, тәжрибәле психотерапевт дауаһы ла кәрәк булып сыҡты! Яҡшы уҡыған, намыҫлы, ғәҙел, тыйнаҡ уҡыусыларым иҫтәре китеп: "Унда бер ғәҙеллек тә юҡ! Рәхәтләнеп күсерәләр, ҡайһы берәүҙәргә күҙәтеүсе булып йөрөүселәр үҙҙәре үк әҙер яуаптар ташый, күптәргә интернет аша ярҙам иттеләр", - тип аптырашҡайны. Ләкин былар ғәҙелһеҙлектең "сәскәләре" генә булған икән! Иң ҡыйыны ошо имтихандарҙың һөҙөмтәләре билдәле булғас башланды. Үҙ белемено, үҙ көсөнә генә ышанып, намыҫлы юл менән БДИ тапшырған бер уҡыусым аҫылынып үлер сиккә етте, атаәсәһе менән бергәләп саҡ ҡотҡарып ҡалдыҡ. Ни өсөн тигәндә, 11 йыл буйы тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшкән был бала БДИ-ла параллель класта "2"легә уҡып йөрөүсегә ҡарағанда аҙыраҡ балл йыйғайны. Бының сәбәбе - тегеһенең интернет аша барлыҡ биремдәргә лә тиерлек әҙер яуап алып ултырыуында ине. "Ошо буламы ни ғәҙеллек? Ышанысым бөттө!" тип ғәрләнеп илаған баланы йыуатырлыҡ һүҙҙәр таба алмағайным...

Бына шунда БДИ-ның әхлаҡи яҡтары ла асылды. Эйе, балаларға ышанырға кәрәк, әлбиттә. Ләкин уларға күрһәтелгән ошо ышанысты оятһыҙ рәүештә файҙаланыусылар ҙа күп бит. Бәлки, быйыл ҡабул ителгән ҡәтғи саралар балаларҙы тырышып белем алырға, атаәсәләргә уларҙың уҡыуын контролдә тоторға, ә БДИ тапшырыу ваҡытында күсереп, күсертеп, әҙер яуаптар ебәреп ятыусы намыҫһыҙҙарҙы иҫкәртергә ярҙам итер?

...Ә шулай ҙа БДИ-ның кире яғы ғына түгел, ыңғай яҡтары ла бар бит. Беҙҙең уҡыусыларыбыҙ Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттарына бер ҡаршылыҡһыҙ уҡырға инәләр икән, тимәк, тәплә белем алыусыларға һәр ерҙә юлдар асыҡ, тигән һүҙ.

**Сәлимә БИКБУЛАТОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМДЫ ҠАЙҘА ТАБЫРҒА?

**Өфө ҡәләһенә 440 йыл тулыуҙы билдәләү менән бер рәттән, Рәсәй көнө лә, милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыу ҙа байрам ителә. Был йәһәттән, баш ҡала буйлап, "Ҡайҙан байрам табырға?" тип аптырап, баш ватып йөрөйһө түгел.**

Баш ҡаланың барлыҡ райондарында, "Ҡашҡаҙан", "Дим", Якутов исемендәге мәҙәниәт һәм ял парктарында, "Моторҙар эшләүселәр", Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайҙары алдындағы майҙандарҙа, "Тулҡын" скверында байрам саралары уҙасаҡ. Шулай уҡ мәҙәниәт учреждениеларында китап, музей экспозициялары күргәҙмәләре эшләйәсәк, экскурсиялар ойоштоpoласаҡ, балалар һүрәттәре һәм башҡа тематик саралар ойоштороласаҡ.

12 июндә, ғәҙәттәгесә, тантаналы саралар республика етәкселегенең Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыуынан башланасаҡ. Шул уҡ ваҡытта Агиҙел йылғаһында һыу-моторлы спорт төрҙәре буйынса ҡала чемпионаты үтәсәк.

Салауат Юлаев майҙанында Өфө ҡала округы хакимиәте башлыҡы призына көрәш буйынса асыҡ турнир ойоштороласаҡ.

Өфө ҡәләһенең 440 йыллығына арналған төп саралар Ленин исемендәге майҙанда үтәсәк. Унда көндөҙгө сәғәт 3-тә тамашаның беренсе - тарихи фактарға нигеҙләнеп театрлаштырылған өлөшө башланасаҡ. Икенсе музыкаль өлөштө тарихҡа байҡау яһағандан һуң ҡарау насип буласаҡ.

Бынан тыш, ҡаланың ете районы Рус драма театры алдына халыҡ һөнәрҙәрен һәм кәсептәрен сағылдырған экспозициялар менән ете тирмә ҡорасаҡ. Шунда уҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәре төрлө күргәҙмәләр ойоштораcаҡ. Быйыл байрам программаһын яңғын һүндереү техникаһының күргәҙмә парады ла биҙәйәсәк. Республика тарихы өсөн әһәмиәтле булған өс датаны берләштергән байрам һуңында (төнгө сәғәт 12-се яртыла) салют аттырыласаҡ.

# СӘСКӘ БИҘӘКЛЕ, ЙӘШЕЛ КҮЛДӘКЛЕ...

**Быйыл баш ҡала Өфө ҡәләһе төҙөлөүҙең 440 йыллығын байрам итергә ныҡлы әҙерләнә. Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, ул сәскә биҙәкле йәшел күлдәк кейгәндәй. Сөнки тарихи датаны ҡаршылап, төрлө хеҙмәттәр, айырыуса коммуналь хужалыҡ ентекле эшмәкәрлек алып бара. Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы В. Чернов сираттағы кәңәшмәлә бәйән итте.**

Мәғлүм булыуынса, 7 апрелдән 25 майға тиклем ҡалала санитар айлыҡ үтә. Ул иғлан ителгәндән алып территорияны таҙартыуға барлығы 700 мең кеше, 20 мең берәмек техника йәлеп ителгән. Дөйөм алғанда 80 миллион квадрат метр майҙан таҙартылған. Шулай уҡ насар торошта булыу сәбәпле, 20 мең метр металл ҡойма, 23 йорт фасады ремонтланған, 14 мең самаһы ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған. Айлыҡ барышында 180 мең кубометр ҡаты көнкүреш ҡалдығы сығарылған. 80 мең квадрат метр майҙанда юлдарҙағы соҡорҙар ремонтланған. "Башҡортостан сәскәләре" предприятиеһы тарафынан 1 мең вертикаль йәшелләндереү элементтары үҫтерелгән һәм уларҙы урынлаштырыу башланған.

"Уфагорсвет" предприятиеһы көстәре менән 2 мең яҡтылыҡ нөктәһенә, 15 саҡрым тышҡы яҡтыртыу селтәренә, 35 саҡрым байрам иллюминацияһына тикшереү уҙғарылған. Әлеге ваҡытта яҡтыртыу сығанаҡтары эленгән, светофор бағаналары, электр менән тәьмин итеүсе нөктәләр йыуыла һәм буятыла. Дөйөм алғанда, урамдарҙы яҡтыртыу буйынса эштәр 15 июлгә тамамланырға тейеш.

Шулай уҡ юлдарға буяулы һәм термопластик билдәләр һалыу, юл билдәләре ҡуйыу, юл билдәләрен алмаштырыу эштәре лә алып барыла. Әлеге ваҡытҡа 9 мең квадрат метр юл ремонтланған, 35 километр барьер ҡоймалары буятылған. 26 майға тиклем ҡала урамдарына биобәҙрәфтәр ҡуйыу тамамланасаҡ. Махсус предприятие ҡарамағында уларҙың һаны әлегә 375 дана. 12 модуль "Городовой" һәм беренсе тапҡыр мөмкинлектәре сикләнгән категория өсөн 5 модуль бәҙрәф урынлаштырыласаҡ. Байрам саралары баш ҡаланың төп майҙаны булған Ленин майҙанында уҙасағын күҙаллағанда, бында 50 биобәҙрәф урынлаштырыласаҡ. Байрам саралары уҙған майҙандар сүпсар контейнерҙары менән дә тәьмин ителәсәк.

"Горзеленхоз" предприятиеһы ҡаланың 63 үҙәк объектында: парктар һәм скверҙар, баҡсалар һәм аллеялар, бульварҙар һәм газондарҙа дөйөм алғанда 269 гектар майҙанда санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү эштәре алып барған. Шулай уҡ сәскәләр ултыртыу эше лә әүҙем атҡарыла: 1 миллион 430 мең сәскәнең 269 меңе ултыртылған, сәскә һәм үҫентеләрҙән торған вертикаль һындарҙы урынлаштырыу ҙа дауам итә. Ҡала территорияһындағы урмандарҙа 21,7 гектар майҙанда 10 меңдән ашыу үҫенте, шул иҫәптән 2,2 мең - ылыҫлы, 3,3 мең япраҡлы ағас ултыртылған.

Байрам өсөн Ленин һәйкәле, Конгресс-холл, Дуҫлыҡ монументы эргәһендәге майҙандар әҙерләнәсәк, халыҡ күп йөрөйәсәк парктар, скверҙар, аллеялар ҙа иғтибар үҙәгендә ҡаласаҡ. 12 июндә Конгресс-холл эргәһендә махсус коммуналь хужалыҡ техникаһы күргәҙмәһе һәм башҡа саралар ойоштороласаҡ. Барлыҡ әҙерлек эштәре 3 июнь иртәнге сәғәт 5-тә тамамланырға тейеш. Ә инде байрам көндәрендә Коммуналь хужалыҡ идаралығына ҡараған предприятиеларҙың авария бригадалары раҫланған графикҡа ярашлы эшләйәсәк.

### ТУҠТА, МӘЛ!

Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Киров районы хакимиәте Пушкин урамындағы аллеяла ағас ултыртыу буйынса акция ойошторҙо. Унда Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм радиоһы хеҙмәткәрҙәре, "Башҡортостан", "Йәшлек", "Киске Өфө" гәзиттәре баш мөхәррирҙәре, БДУ-ның журналистика бүлеге студенттары ҡатнашты.



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Хисамитдинованы фән үҫешендә уңышлы эшмәкәрлеге һәм күп йылдар намыҫлы хеҙмәте өсөн Халыҡтар дуҫлығы ордены менән наградланы.

✓Журналистар өсөн торлаҡ программаһын Башҡортостанда көҙ башына әҙерләйәсәктәр. Был турала Өфөлә 16 майҙа уҙған БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында ведомство башлығы Борис Мелкоедов хәбәр итте. "Тармаҡ хеҙмәткәрҙәрен торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе элеккесә көнүҙәк, - тип билдәләне Борис Мелкоедов. - Полиграфия өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы - 21 мең һум самаһы, редакция хеҙмәткәрҙәренең - 19 мең һумлап. Бөтәһе лә баҙар хаҡы буйынса торлаҡ һатып ала алмай. Әлеге ваҡытта Матбуғат агентлығы журналистарҙы торлаҡ менән тәьмин итеү йәки шәхси йорт төҙөү өсөн ер участкаһы бүлеү менән бәйле мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса пландар билдәләне. Торлаҡ программаһын йәй дауамында әҙерләргә планлаштырабыҙ".

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов Георгий Шебаевты үҙ теләге буйынса һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһынан бушатты. Министр вазифаһын башҡарыу бурысы республика һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары Александр Афанасьевҡа йөкмәтелде, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәте сайты.

✓Башҡортостандың район гәзиттәрендә "Президент ауылдарҙа йәшәүселәрҙең һорауҙарына яуап бирә" рубрикаһы барлыҡҡа киләсәк. Был хаҡта ошо көндәрҙә үткән БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында мәғлүм булды. Проект әлегә әҙерләнә. Һорауҙар республика Президенты адресына почта аша йәки рәсми сайтҡа электрон форма ярҙамында килгән хаттарҙың иғтимағи мөһимдәре иҫәбенән һайланып алынасағы билдәле. Рубрика айына берике тапҡыр сығасаҡ. Проектҡа бөтә район гәзиттәре йәлеп ителәсәк.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов 2014 йылдың XXII ҡышҡы Олимпия уйындарында һәм XI Паралимпия уйындарында ҡатнашыусылар, республиканың физкультура-спорт активы менән осрашты, уларҙы дәүләт наградалары һәм Рәхмәт хаттары менән бүләкләне. Халыҡтар дуҫлығы ордены менән Кирилл Михайлов, Руслан Захаров, Семен Елистратов һәм Ирек Зарипов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде.

АЛДАЙҘАР!

# ДӨЙӘ ТҮГЕЛЛЕГЕНДӘ...

## иҫбатлап ҡара

**"Былтыр машинамдан бәләкәй ҡул сумкаһын урланылар, - тип һөйләгәйне Рәфис исемле бер танышым. - Унда паспортым, фатир асҡыстары, бер аҙ аҡсам бар ине..." Шул көнө үк ул фатир йоҙаҡтарын яңыға алмаштырып ҡуя һәм эске эштәр бүлегенә барып, ғариза яҙа, яңы паспорт юллап ала.**



Дөрөҫ, паспорт өҫтәлендә, оҙаҡ көтөргә тура киләсәк, тигәс, танышым паспортын "урланылар" тип түгел, ә "юғалттым" тип яҙа. Ике ай самаһы ваҡыт үткәс, Рәфис дүрт төрлө банктан бурыстарын кисектермәй түләүҙе талап иткән шылтыратыуҙар һәм хаттар ала башлай. Һис ҡасан булмаған был "бурыстарҙың" дөйөм суммаһы 500 меңдән ашып китә ки! Асыҡланыуынса, бурҙар уның урланған паспортын файҙаланып, төрлө банктарҙан кредиттар алған булып сыға. Кредиттар тарихы бюроһы хеҙмәткәрҙәре һөйләүенсә, уларға ай һайын тиҫтәләгән ана шундай сигналдар алырға тура килә икән.

Бындай уҫал һәм аяуһыҙ мутлашыуҙарҙың бер нисә төрлө юлы бар. Иң йыш осрай торғаны - урланған документтарҙы файҙаланып, кредит алыу. Бында бурҙар документҡа фотоһүрәтте генә алмаштырып йәбештерә лә - эш тә бөтә. Ә бына ксерокопиялар буйынса бирелеүсе кредит эштәре банк хеҙмәткәрҙәренең енәйәтселәр менән бергәләп хеҙмәттәшлек итеүе тураһында һөйләй.

Яманлыҡ ҡылыуҙың тағы ла бер заманса ысулы - сит кешенең персональ мәғлүмәттәрен файҙаланыу юлы менән онлайн-кредит алыу. "Бындай осраҡтарҙа, - тип кәңәш бирә кредиттар тарихы бюроһы хеҙмәткәрҙәре бәләгә тарыусыларға, - полицияға барып - ғариза, ә банк исеменә дәғүә яҙырға кәрәк буласаҡ. Унан һуң был кредитҡа бөтөнләй ҡатнашлығығыҙ булмауҙы раҫлаусы документтар һәм башҡа дәлилдәрҙе мөмкин тиклем күберәк туплағыҙ (мәсәлән, кредит алынған көндә һеҙҙең эштә, юлда, ялда йә командировкала булыуығыҙҙы күрһәткән документтар, квитанциялар, билеттар, паспортығыҙҙы юғалтыу хаҡындағы ғаризағыҙ, һ.б.). Ошондай күңелһеҙ хәлгә тарымаҫ өсөн белгестәр граждандарға ҡайһы бер кәңәштәр биреүҙе урынлы күрә:

- паспорт мәғлүмәттәрегеҙҙе ҡайҙа етте - шунда, кемгә етте - шуға күрһәтмәгеҙ. Үкенескә күрә, паспорт ксерокопияһын төрлө ойошмаларҙа булғанда талап итәләр, шуға күрә ҙур һәм абруйлы компаниялар менән эш итергә тырышығыҙ;
- паспорт мәғлүмәттәрегеҙҙе бигүк ышаныслынан булмаған интернет ресурстарында ҡалдырмағыҙ, электрон почта аша ебәрмәгеҙ, документтығыҙҙы таныш түгел кешеләргә һәм билдәһеҙ кредит брокерҙарына ышанып тапшырмағыҙ;
- йылына бер тапҡыр булһа ла үҙегеҙҙең кредит тарихығыҙҙы тикшертеп тороғоҙ.

**Әгәр үҙ иркегеҙҙән тыш "кредит алыусы" булып иҫәпләнгән хәлдә, ниҙәр эшләргә мөмкин?**

1. Кредит тарихтарының үҙәк каталогына (ул Үҙәк банкта алып барыла) һорау ебәрегеҙ, шул саҡта һеҙ үҙегеҙгә япһарылған кредиттарҙың ниндәй бюрола һаҡланыуы хаҡында белерегеҙ.
2. Был бюроларҙан отчеттар һорап алығыҙ һәм ниндәй банкта күпме "бурысығыҙ" булыуын асыҡлағыҙ.
3. Һеҙҙең исемгә сит кредит бирелгән банк адресына мөмкин тиклементеклерәк итеп дәғүә яҙығыҙ. Бындай мөрәжәғәттәрҙе банк ғәҙәттә 30 көн эсендә ҡарай.
4. Әгәр банк алдашыу фактын асыҡлаһа, һеҙҙең исемгә бурысты юҡҡа сығарасаҡ, шул саҡта яңынан бюроға мөрәжәғәт итеп, кредит тарихығыҙҙы төҙәтеүҙе талап итә алаһығыҙ.
5. Үкенескә күрә, банктар һәр ваҡытта ла клиент мәнфәғәтен күҙәтеп бармай, шул саҡта һеҙ судҡа йә булмаһа Роспотребнадзорға мөрәжәғәт итегеҙ.
6. Бурыс ниндәй генә, хатта аҙ ғына суммала булғанда ла, сит кеше кредитын түләй күрмәгеҙ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӨЙРӘТӘ АЛЫРҘАРМЫ?

**Рәсәй властары коррупцияға ҡаршы закондар буйынса дәүләт чиновниктары өсөн махсус курстар ойоштороға ҡарар иткән. Уның маҡсаты - чиновниктарҙа бүләктәр алыуға ҡарата кире тойғолар тәрбиәләү. Йәнәһе, тыйыу юлы менән генә бер ни ҙә ҡылып булмай, чиновниктарҙа эске мәҙәнилек тойғоһонан тыш, ришүәткә лә, бүләктәргә лә бирешмәй торған власть әһеленең ысын образын булдырыу мөһим.**

Лекциялар барышында Президент хакимиәте хеҙмәткәрҙәренә, әгәр бүләк алғанһың икән, тимәк, уны биргән кешегә бурыслы булып ҡаласаҡһың, һөҙөмтәлә теге йәки был ҡарарға килеүҙә үҙаллылығыңды юғалтаһың, ваҡиғаларҙы контролдән ысҡындыраһың, тип өйрәтәләр. Дәүләт хеҙмәткәрҙәре араһында бүләктәргә кире ҡараш булдырыу кәрәклеге тураһындағы ҡарар ошо хаҡта дәүләт башлығы фекерен һәм уның ҡушҡандарын иҫәпкә алып булдырыла. Хөкүмәт хакимиәте вәкилдәре белдереүенсә, тейешле дәрестәр һәм лекциялар башланған да инде һәм бер ни тиклем ваҡыттан һуң чиновниктарҙан ғүмерҙәренең төп маҡсатын илгә хеҙмәт итеүҙә күреүсе ысын "самурайҙар" яһамаҡсылар, имеш.

Әйткәндәй, Рәсәй хөкүмәтенең һуңғы ҡарарына ярашлы, чиновникҡа хаҡы 3 меңдән дә артмаған бүләктәр алырға ярай, тик бындай бүләктәр хаҡында ул өс эш көнө эсендә ведомствоның эске хеҙмәтенә хәбәр итергә тейеш.Ә инде хаҡы әлеге сумманан артып киткән бүләкте тапшырырға тура киләсәк, юғиһә, был уға РФ Енәйәт кодексының 290-сы статьяһы (ришүәтселек өсөн) менән янай.

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

КӨНАУАЗ

# КИЛДЕ БИТ ЗАМАНАЛАР...

**Йылдың һуңғы көндәрендә ил Президенты Владимир Путин РФ Енәйәт кодексына халыҡ алдында сепаратизмға саҡырыу өсөн енәйәт яуаплылығын көҙәллаған статья индереүсе законға ҡул ҡуйғайны. Ул тарихи 9 Май көндө үҙ көсөнә инде.**



Законда: "Рәсәй Федерацияһының территориаль бөтөнлөгөн боҙоуға йүнәлтелгән эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыуға халыҡ алдында саҡырыуҙар 300 мең һумға тиклем йәки ике йылға тиклем эш хаҡы йәиһә башҡа килеме күләмендәге штраф, йәки 300 сәғәткә тиклем мотлаҡ эшләү, йә өс йылға тиклем иректән мәхрүм итеү менән язалана", - тиелә. Шулай уҡ документта киң мәғлүмәт саралары, шул иҫәптән интернет селтәрен ҡулланып, шундай уҡ эшмәкәрлек алып барған өсөн 480 сәғәт мотлаҡ эшләү йәки 5 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡаралған.

Был закон ниндәй ҡараштан сығып ҡабул ителгәндер, әммә уның шойҡаны милли республикаларға (бәлки, оппозицияға ла?) төшөр, моғайын. Сөнки бөгөн үҙен "федерация" тип күрһәтергә тырышҡан Рәсәй һаман да империя ҡылыҡтарынан айырыла алмайынса, төбәктәрҙең үҙаллылығын "йота" бара, ресурстар, һалымдар үҙәкләштерелә, төбәккә хас мәҙәниәт (шул иҫәптән милли мәғариф) яйлап баҫтырыла икән, был осраҡта халыҡтың үҙаңы уянып, хәтер ҡаны уйнай башлауын инҡар итеп булмай. Тарих биттәре лә быны асыҡ сағылдыра. Ошо юҫыҡтан сығып ҡарағанда, үҙаллылыҡ өсөн көрәшкән батырҙарыбыҙҙың, милли зыялыларыбыҙҙың фекерҙәренән цитаталар килтереү ҙә хәҙер сепаратизм булып иҫәпләнмәҫ, тип әйтеүе ҡыйын. Һәр хәлдә, әлегәсә Интернет селтәрендә лә, матбуғат биттәрендә лә ҡыйыу фекерҙәр яҙыла килһә, артабан һәр кем итәк-еңен йыйыңҡырап йөрөр инде. Ни тиһәң дә, дуҫ бар, дошман бар... Хатта был закон ҡайһы яғы менәндер уҙған быуаттың 37-се йылын хәтерләтеп, шомландырып та ҡуя. Яҡын күргән кешеләрең менән ниндәйҙер байрам өҫтәле артында үҙ-ара ғына һөйләшеп ултырырһың, тарихҡа ингән кешеләрҙең уй-ниәттәре буйынса фекер алышырһың... Тәүбә-тәүбә!..

Сағыштырып ҡараһаң, КПРФ тәҡдим иткән һәм ҡултамға һалынған варианты әле "йомшаҡ" икән. Сөнки ноябрҙә "Берҙәм Рәсәй" һәм "Ғәҙел Рәсәй" депутаттары "сепаратизмға саҡырыу"ҙарҙы ғына түгел, уларға симпатия һәм шик белдергән өсөн генә лә 20 йылға төрмәгә ултыртыуҙы талап иткән була. Ирекһеҙҙән, килде бит заманалар, тиергә генә ҡала...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡолаҡ һыҙлаһа

❖ Һыуға борсаҡ бешерергә һалығыҙ һәм күтәрелгән быу ике ҡолаҡты ла йылытырлыҡ итеп, һауыт өҫтөнә башығыҙҙы эйегеҙ.

❖ Баланың ҡолағы һыҙлаһа, уны йыуындырмай тороғоҙ.

## Бит тиреһен таҙартыу

❖ Биттә ҡыҙыл тимгелдәр булһа, уртаса ҙурлыҡтағы бер әсе алманы ҡырырға ла, 150 грамм һөттә бер аҙ ҡайнатырға. Һыуынғас, 2 йомортҡа һарыһы ҡушып, яҡшылап болғарға. Шул массаны битҡә һөртөп, 15 минут торорға. Ҡыҙыл тимгелдәр бөтәсәк.

## Астма

❖ 1 стакан һыуға май айында йыйылған ваҡланған дегәнәк япрағын, ярты стакан уҫаҡ япрағын, 1 балғалаҡ аҡ шыршы (пихта) энәләрен һалып, ярты балғалаҡ сода өҫтәп, 5-6 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға һәм шул төнәтмәне көнөнә 1 мәртәбә, иртәнсәк ашар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә.

❖ 100 грамм аҡ майға 5 бүлем һарымһаҡ, үҙең теләгәнсә тоҙ һалып, болғатырға. Һарымһаҡ майы барлыҡҡа килә, шуны икмәккә һылап, йәки картуфҡа ҡушып ашарға кәрәк. Был дауа һау кешегә лә файҙалы.

## Баш ауыртһа

❖ Ҡайын туҙынан башлыҡ тегеп кейегеҙ.

❖ Йөндән бәйләнгән билбау менән башты ҡыҫып бәйләү ҙә файҙалы.

❖ Маңлайға кәбеҫтә япрағы ҡуйырға ла була.

❖ Яулыҡ йәки кепка эсенән ҙур ғына дегәнәк япрағын башҡа һалып кейегеҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## Тәндең сейләнеп тишелеүе

❖ 100 грамм юл япрағын ит турағыстан үткәреп, быяла банкаға һалырға, 50 грамм бал өҫтәргә, болғатырға һәм ҡайнап ултырған һыуға ҡуйып, 10 минут ҡайнатырға. Һыуынғас, яралы урынға һөртөргә. Һыуыҡкыста һаҡларға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӨНКҮРЕШ ЙОЛАЛАРЫ

**Башҡорттар араһында ислам диненең нығыныуынан һуң, ғаиләлә, шулай уҡ йәмғиәттә кешеләрҙең үҙен тотоу тәртибе дини (шәриғәт) һәм донъяуи ҡағиҙәләр системаһына буйһона. Шәриғәт мосолмандың дини бурыстарын, юридик һәм хөкөм итеү нормаларын күҙәткән. Былар менән бергә исламға тиклем булған ышаныуҙар ҙа ғаилә йолаларында киң күҙәтелгән.**

Башҡорттарҙың этикетында традицияларҙы һаҡлау, ололарҙы һәм ата-әсәне хөрмәтләү, балаларҙы хәстәрләү, киң күңеллелек, ҡунаҡсыллыҡ, итәғәтле булыу, тыйнаҡлыҡ, ғәҙеллек, башҡа милләттәргә һәм диндәргә сабырлыҡ сағылыш таба.

Мосолман кешеһе өсөн Аллаһтың берлеген таныу, көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, саҙаҡа таратыу мотлаҡ һаналған. Ислам йолалары араһында хажға барыу, ҡорбан килтереү ҙә булған. Ҡөрьәндең "Мәәидә" (Табын), "Баҡара" (Һыйыр), "Әғрәф" (Кәртәләр) һәм башҡа сүрәләрендә, шулай уҡ хәҙистәрҙә аҙыҡ-түлек, уны табыу, әҙерләү, табынға биреү һәм ашауға бәйле тәҡдимдәр бар. Башҡорттарға хәләл ризыҡтар рөхсәт ителеп, "үләкһә, ҡан, суsҡа ите, Аллаһтан башҡа затҡа бағышлап салынған, быуылып үлгән, үлтерелгән, бейеклектән йығылып үлгән, һөҙөп үлтерелгән, йәнлектәр ботарлаған хайуан итен" ашау тыйылған. Шулай ҙа ризыҡ булмағанда асығыуҙы баҫыр өсөн харамды ашарға рөхсәт ителеүе тураһында әйтелә. Ҡөрьән сүрәләрендә башҡа тыйылған ризыҡтар ҙа һанала. Мәҫәлән, мосолман шарап эсеү генә түгел, уны эсеүселәр эргәһендә ултырырға ла тейеш түгел. Шәриғәт буйынса, йыртҡыс йәнлектәрҙең һәм ҡоштарҙың итен ашау, шулай уҡ ризыҡ өсөн тере хайуандың ит киҫәген ҡырҡып алыу тыйылған. Рөхсәт ителгән хайуандарҙың итенең түбәндәге өлөштәре ашауҙан тыйылған: ҡан, енес ағзалары, аңҡау биҙе, ҡалҡан биҙ, үт ҡыуығы, талаҡ, һейҙек ҡыуығы, күҙ ҡараһы. Ислам буйынса ҡайһы бер ризыҡтар, мәҫәлән, йылҡы ите, ҡымыҙ тыйылмаған да, шулай ҙа уларҙы ашау артыҡ маҡталмай ҙа. Әммә башҡорттарҙың туҡланыу рационында, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе башҡа халыҡтар кеүек үк, йылҡы ите һәм ҡымыҙ гел булған.

Туҡланыу гигиенаһына килгәндә, намаҙ уҡыу һәм ашар алдынан тәһәрәт алыу, ҡулдарҙы таҙа тоторға кәрәк ... Ғөмүмән, башҡорттарҙа таҙалыҡҡа ҙур урын бирелгән. "Шапшаҡ ҡатындың ашын эсмә, һүҙен ишетмә", "Ярлы йәшәү оят түгел, бысраҡ йәшәү оят", "Паклыҡ һөйгән һау булыр" кеүек мәҡәлдәр быны раҫлай. Ашарҙан алда һәм унан һуң ҡулды йыуыу, ауыҙҙы сайҡатыу ҡағиҙәһе лә теүәл үтәлгән. Төнгөлөккә ризыҡты, һауыт-һабаны шайтан яламаһын, тип, ябып ҡуйғандар.

Ғаиләлә ыңғай энергетика, татыулыҡ тойғоларын тыуҙырыу өсөн бергәләп ултырып ашауҙың мөһим икәнлеген борондан белгән ата-бабалар. "Оло ҡаҙанда бешкән аш түгелмәҫ" тигәндәр, ғаилә тулы килеш йыйылғас ҡына ашарға ултырғандар. Йәш килендәр генә аш-һыу яғында, шаршау артында ашаған. Сөнки ул бер йыл дауамында, хатта унан да оҙайлыраҡ ваҡыт ҡайныһына ябылмаған йөҙ менән күренергә, уның менән һөйләшергә тейеш булмаған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА...

# БАЛА ҺӨЙӨҮГӘ НИГЕҘЛӘНҺӘ...

## яҙмышың да, ғаиләң дә емерелмәҫ



**Бер бала ғына тәрбиәләгән килене ауылдан килгән ҡәйнәһенә: "Беҙҙә генә тукта ла ҡуй. Ҡыҙыңдың балалары күп, үҙеңә бимаза ғына булырҙар", - тип әйтә икән. Ҡәйнәһе: "Балалар миңә ҡамасау түгел, мин ауылда былай ҙа тынлыҡтан ялыҡҡанмын инде", - тигән дә, улының иркен фатирын үҙһенмәй, ҡыҙының балалар тауышынан гөрләп торған фатирына киткән...**

Табибтар раҫлауынса, һуңғы йылдарҙа балаһыҙ ғаиләләр һаны артҡандан-арта бара. Түлһеҙлекте йыш ҡына насар экология менән бәйләйҙәр - был дөрөҫтөр ҙә. Тәбиғи ризыҡ урынына төрлө суррогат, антибиотик, гормон, химия ашап үҫкән кешенең түлһеҙ булыуына аптырарға кәрәкмәйҙер. Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн яҡынса 10 миллион кеше түлһеҙ тип иҫәпләнә. Был халыҡтың 15 проценты, тигән һүҙ. Түлһеҙлектә тик ҡатын-ҡыҙҙы ғына ғәйепләү ғәҙәте бар. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, түлһеҙлектә ғәйеп тигеҙ бүленә: уның 30 проценты - ирҙәргә, 30 проценты - ҡатындарға, 30 проценты икеһенә лә тура килә. Тик ҡалған 10 процент сәбәпте генә медицина фәне бер нисек тә аңлата алмай: ир ҙә, ҡатын да һаулығы буйынса бала таба ала, әммә, ни сәбәптәндер, был тормошҡа ашырылмай. Ошо 10 процент хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле, ни тиһәң дә, был бит 1 миллион кеше, тигән һүҙ.

Таныштарым араһында ошо "тиҫтә"гә ингән бер йәш ҡатын бар. "Ниндәй генә клиникаларҙа, ниндәй генә тикшереүҙәр үтмәнем. Иремде лә тикшерттем - икебеҙ ҙә иҫән-һау, түлһеҙлеккә бер ниндәй физик сәбәп юҡ, ти белгестәр ҙә. ЭКО ярҙамына мөрәжәғәт итеү ҙә һөҙөмтә бирмәне..." - тип һөйләгәйне ул.

Был танышым менән һөйләшеп ултыра торғас, бер ҡыҙыҡ факт асыҡланды. Уның атаһы менән әсәһе эшкә ныҡ бирелеп (совет тәрбиәһе), "бала - ҡамасау" тип йәшәгән. Әсәһенә күп тапҡырҙар аборт та эшләтергә тура килгән. Балаға булған ошондай кире мөнәсәбәт уларҙың өс балаһына ла инстинкт буйынса бирелгән. Танышым һүҙҙәре буйынса, "ҡан менән күскән". "Беҙҙең беребеҙ ҙә бала яратмай, - ти ул уфтанып. - Ә иң аянысы - беребеҙ ҙә бала таба алмай. Быйның сәбәбе психикала ятҡанын аңлап, психотерапевҡа йөрөй башланым".

Уның был һүҙҙәренән һуң бер ваҡиға иҫемә килеп төштө. Бер әсәй үҙ балалары алдында кеше балаларын "йолҡош", "маңҡа" кеүек һүҙҙәр менән мыҫҡыллап көлөр булған. Хәҙер ошо "тәрбиә"не алған бер балаһының балаһы юҡ. Икенсеһенеке зәғиф булып тыуҙы, уны кешегә күрһәтергә лә оялып, өйҙә генә тоталар. Өсөнсөһөнөң ике балаһы ла теге донъяға күсте...

Эйе, бала яратҡан ҡатын-ҡыҙ барыбер бәхетле. Уның күңеле киң, уның ризығы киң, уның йөҙө нурлы. Минең ауылдаштарым Тәнзилә еңгәй һәм Камил ағай Тайыповтарҙы өлгө итеп килтерер инем был тәңгәлдә. Тәнзилә еңгәй ике апайының, бер ҡустыһының һәм һеңлеһенең урта мәктәпкә йөрөп уҡыған бөтә балаларын да интернатҡа ебәрмәй, үҙ балалары һымаҡ тәрбиәләне (Бәғзеләр исем өсөн генә тапҡан берҙән-бер балаһын интернатҡа ебәреүҙе хуп күрә: унда һәйбәт белем алыу уның өсөн һылтау ғына булып торалыр). Үҙенең ҡәйнәһе Ғәйзамал әбейҙе лә ихтирам итте, икәүләп ауыл конкурсында "Иң яҡшы килен һәм ҡәйнә" исемен алды. Бына кемгә "Әсәлек даны" миҙалын бирергә кәрәк!

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең арала бала яратмаған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа етерлек. Ундайҙар йә бөтөнләй балаһыҙ, йә бер бала ғына аҫырай. Ундайҙарға балаларыңды тейәп килеп төшһәң, берәй нәмәне емереп, ватып, бысратып ҡуймаһындар, тип, ҡунырға ҡалһаң - "балыҡ тотоп" ятмаһындар, тип хафаланырға тотоналар. Бала-саға менән була торған хәл икәне уларҙың башына ла инеп сыҡмай. Хоҙайҙың ни өсөн уларға бала бирмәүен дә шәйләргә була бында.

Оло быуын кешеләре һөйләүе буйынса, беҙҙең ауылда Нурислам бабай артыҡ шуҡ бер малайҙы тотоп, ҡолағын борған да, "Ҡайтып, атайыңа әйт", тип ҡайтарып ебәргән. Был бик һөҙөмтәле алым булған: иптәштәре алдында оятҡа ҡалған теге малай был насар ҡылығынан ғына түгел, ә "бөтә ҡолаҡ борҙорторлоҡ ҡылыҡтарҙан" ғүмерлеккә ваз кискән. Был педагогик сара ҡалғандар өсөн дә ҙур һабаҡ булған. Хәҙер иһә кеше балаһының ҡолағын бороу ғына түгел, ҡаты итеп һүҙ ҡатып та булмай, ти ололар. Быйның сәбәбе Нурислам бабай һымаҡ аҡһаҡалдарҙың булмауында ғына түгел. Хәҙерге ғаиләләрҙә балаларҙың әҙ булыуында. Элек, балалар күп, ата-әсәләре көнө-төнө эштә булғас, ошо бабайҙарҙың тәрбиә һабаҡтары бирерлек тулы хоҡуғы ла булғандыр. Ә хәҙерге заман ололары, бер баланы үҙҙәренең ата-әсәһе тәрбиәләргә тейеш, тип иҫәпләп, был ғәмәлдән тыйыла. Ә эш менән мәшғүл ата-әсә тәрбиәне мәктәпкә япһарырға тырыша, мәктәп иһә, "тупты кире тибә".

Хәҙерге тормошто балалар баҡсаһынан башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Ҡала ерлегендә бигерәк тә. Ғалимдар әйтеүе буйынса, 5 йәшенә тиклем баланың әсәһенән бер нисә сәғәткә генә айырым булыуы ла уның психикаһына насар тәьҫир итә икән: баҡсаға барырға теләмәй, ҡысҡырып илаған балаларҙы күҙ алдына килтерегеҙ, был юҡҡа түгелдер. Тимәк, декрет ялын биш йылға тиклем оҙайтып булмағас, бер-бер артлы бер нисә бала табып, өйҙә ултырыу балаларың тәрбиәһе өсөн күпкә файҙалыраҡ.

Юғарыла балаларҙы патологик рәүештә яратмағандар тураһында һүҙ барҙы. Бәхеткә күрә, үҙенең ғүмерен балаһыҙ күҙ алдына килтермәгәндәр ҙә етерлек. Мин балалар баҡсаһында түбән эш хаҡына ла риза булып эшләп йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар тураһында әйтәм. Башлыса матди шарттар арҡаһында күпләп бала табыу бәхетенән мәхрүм булғас (быға хәҙерге тормош шарттары ғәйепле), улар ошо бәхетте кеше балаһын тәрбиәләүҙә таба. Был ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, үҙ ғаиләләрендә лә яҡшы әсәй, килен, ҡатын, өләсәй, ҡәйнә. Был турала мин үҙебеҙҙең өс балабыҙ ҙа йөрөп тәрбиә алған баҡсаның хеҙмәткәрҙәре Әлмирә Насирова, Гүзәл Рәхимоваларҙың миҫалында ышаныслы әйтә алам. Балалар баҡсаһы бала яратмаған осраҡлы килеп эләккән тәрбиәселәрҙән тиҙ генә ҡотола ул, ти баҡса мөдире Римма Ильина ла.

Ғөмүмән, беҙҙең илдә күптәндән ғаиләгә ҡаршы "һалҡын һуғыш" бара. Халыҡ иҫәбе мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы 20 йылда рәсми никахта торған ғаиләләрҙең һаны 6 миллионға кәмегән, шул уҡ ваҡытта ғаилә төҙөрлөк кешеләрҙең иҫәбе 8 миллионға артҡан. Шул уҡ сериалдарҙы ғына алып ҡарайыҡ. Америка ғалимдары иҫәпләүе буйынса, ошо "Санта-Барбара"ларҙы ҡарау арҡаһында һуңғы 20 йыл эсендә Бразилияла 3 миллиондан артыҡ ғаилә тарҡалған, 800 меңгә кәм бала тыуған.

Ҡунаҡ никахы, һынау никахы, граждан никахы тигән төшөнсәләр барлыҡҡа килде. Нисек кенә булмаһын, уларҙы ғаилә тип әйтеп булмай - был никах репетицияһы булып күренһә лә, асылында, ғаиләнән ҡасыуҙы аңлата. Ғөмүмән, ысын ғаилә ҡиммәттәре тураһында һөйләшеүҙе дауам итергә саҡырам гәзит уҡыусыларҙы. Был беҙҙең балаларыбыҙға, йәштәребеҙгә кәрәк ғәмәл булыр.

Бер фәрештә кешеләрҙең нисек эшләгәнен тикшерергә булған. Крәҫтиәндең иртәнге таңдан ҡара кискә тиклем бил бөккәнен күҙәткән: бер йыл ул һәйбәт уңыш алған, ә икенсе йылына ҡоролоҡ арҡаһында аслы-туҡлы йәшәгән. Фәрештә көнө-төнө шиғыр яҙған кешенең бөлгөнлөктә йәшәгәнен күреп аптыраған. Бер байҙың да хаҡтар төшөү арҡаһында фәҡир ҡалыуына шаһит булғас: "Кеше бик тырышып эшләүгә ҡарамаҫтан, уның хеҙмәте лайыҡлы баһаланмай", - тигән фекергә килгән. "Эйе, дөрөҫ, - тигән уға оло фәрештә. - Донъяла тик бер генә кеше эше өсөн лайыҡлы хаҡ ала. Ул - әсәй кеше". "Нисек инде, - тип ғәжәпләнгән йәш фәрештә. - Әсәйҙәр көнө-төнө эшләһәләр ҙә, уның өсөн уларға аҡса түләгәндәрен күргәнем юҡ!" "Әсәйҙең эше өсөн иң юғары хаҡ - ул балаларының һәм туғандарының һөйөүе..."- тигән оло фәрештә. Бында аңлатма биреп тороу кәрәкмәйҙер.

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

*ФЕКЕР ҠОРО*

**Сибайҙа "Территорияларҙың тотороҡло үҫеше: теория һәм практика" тип аталған ғилми-ғәмәли конференция үтте. Сараның ойоштороусылары булып Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы, Сибай ҡалаһы хакимиәте, БР Төбәк тикшеренеү институты, Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал аръяғы филиалы, БДУ-ның Сибай институты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты сығыш яһаны. Конференцияла ҡатнашыусыларҙың географияһы ла киң ине, Ҡаҙағстандан, АҠШ-тан, Рәсәй төбәктәренән, Башҡортостандың ҡала-райондарынан вәкилдәр килде. Өс йүнәлеш буйынса секциялар һәм ауыл ерҙәрендәге эшҡыуарлыҡ мәсьәләләренә арналған түңәрәк ҡор эшләне.**



# АУЫЛДАРҘЫ ҺАҠЛАУҘЫҢ...

## төрлө юлдары барланды

Конференциялағы сығыштарҙың көньяҡ-көнсығыш райондарының, Сибай ҡалаһының үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп әҙерләнеүенә ҡарамаҫтан, уларҙа яңғыраған проблемалар Башҡортостандың башҡа ҡала-райондары өсөн дә, Рәсәй төбәктәренә лә берҙәй үк хас. Экология мәсьәләһе, уның менән бәйле халыҡтың сәләмәтлеге ҡаҡшауы пленар ултырышта бер нисә докладта сағылыш тапты, шулай уҡ ошо йүнәлеш буйынса айырым секция эшләне. Ысынлап та, сәнәғәттең йылдам үҫеүе был проблеманы тәрәнәйтә генә. Ә кеше факторы менән аңлатылған битарафлыҡ, ваҡытында тейешле саралар күрелмәүе арҡаһында төрлө сирҙәрҙең шашыуы күҙәтелә, төрлө быуын кешеләренең, шул иҫәптән балаларҙың үлеме теркәлә. Биология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт медицина университеты профессоры Эльвира Имелбаева үҙ сығышында экологик факторҙарҙың Сибай ҡалаһындағы балалар сәләмәтлегенә кире йоғонто яһауы тураһындағы мәсьәләгә айырым туҡталып китте.

Яңы иҡтисади шарттарҙа ауылдарҙың да тәрән көрсөккә терәлеүен абайлауы ҡыйын түгел. Башҡортостан ҡала һәм ауыл халҡы нисбәте буйынса әлегә тотороҡло төбәктәрҙән һаналып килә. Ләкин был мәсьәләне үҙағышына ҡуйыу, ауыл халҡын һаҡлау, демографияны яйға һалмау насар эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Мәскәүҙән килгән иҡтисад фәндәре докторы Виталий Пациорковский Свердловск өлкәһендә булған күңелһеҙ хәлде бәйән итте. 90-сы йылдар башында был төбәктә ауыл халҡының 11 процент ҡына тороп ҡалыуы сәбәпле, өлкә етәкселеге бер нисә тиҫтә ҡала тибындағы ҡасабаны ауылдарға "таратырға" мәжбүр була.

Көньяҡ-көнсығыш райондарында эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә арналған түңәрәк ҡор бигерәк тә йәнле фекер алышыуҙар тыуҙырҙы. Унда ауыл мәсьәләләре менән шөғөлләнгән фән, дәүләт, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, үҙ эштәрен ойоштороп, яҡшы ғына уңыштарға өлгәшкән эшҡыуарҙар ҡатнашты. Уны асып, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Рәфҡәт улы Күсәбәев, оптималләштереү ҡотолғоһоҙ булған шарттарҙа ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү нисек итеп алып барылырға тейеш, тигән һорау ҡуйҙы. Ауыл халҡы хоҡуҡтарын яҡлаусы институт булараҡ, Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (ТОС) ойоштороу яҡшы һөҙөмтәләр бирер ине, тип, республикала ошо өлкәлә булған миҫалдар менән таныштырып китте.

Ысынлап та, ауыл бөтә, мәктәп ябыла, тип зарланып ултырыу дөрөҫ түгел, ә халыҡты ауылда ҡалдыра, уны һаҡлай алырҙай альтернативалар эҙләү мөһим. Халыҡты эш менән дә тәьмин итергә кәрәк. Силәбе өлкәһенең Арғаяш районынан килгән фермер Марат Камалов бәләкәй генә хужалыҡтан картуф үҫтереү буйынса Рәсәйҙең иң алдынғы хужалыҡтары иҫәбенә инеү тәжрибәһе менән таныштырҙы. Картуф һәм иген культураларын үҫтереүҙә агрономияның бар ҡаҙаныштарын әүҙем ҡулланған "Камалов М.Р." крәҫтиән-фермер хужалығы фермерлыҡ эшенең бер эталоны булып тора. Ә Фәнис Кәримов Баймаҡ районында йылҡысылыҡ һәм агро-этно-туризмды үҫтереү менән уңышлы шөғөлләнә. Әйтергә кәрәк, ике фермер ҙа эштәрен кредит ярҙамына мөрәжәғәт итмәйенсә, үҙ көстәре менән генә алып баралар. "Кредитҡа инһәң, ул һине, киреһенсә, бөлдөрөүе бар", тип иҫәпләй улар.

"Урал аръяғы эшлекле донъяһы" бизнес-үҙәге директоры Айнур Ишмөхәмәтов сарала ҡатнашыусыларҙы дәүләттең эшҡыуарҙарға күрһәткән ярҙамы формалары менән генә таныштырып ҡалманы, ә бөгөнгө башҡорт менталитетына хас кире сифаттарға ла туҡталып китте. "Батша Рәсәйе ваҡытынан башҡорттарҙы бөтөрөргә теләү һәм бөтә ҡаршы сығыусыларҙы ла ҡаты язалау башҡорттарҙа ниндәйҙер ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килтергән. Бөгөнгө көндә ошо ҡурҡыу психологияһы сәбәпле, башҡорттар күп өлкәләрҙә, шул иҫәптән эшҡыуарлыҡта ла әүҙемлек күрһәтмәй. Шул уҡ ваҡытта бының өсөн бар мөмкинлектәр булдырылған", тигән фекерҙәр яңғыратты ул.

Сираттағы сығыш яһаусы, Сибай ҡалаһынан Илшат Ҡужагилдин: "Беҙ ошондай саралар барышында аҡыллы фекерҙәр әйтәбеҙ ҙә ул, ләкин улар тәғәйенләнгән кешеләргә, йәғни ауыл халҡына барып етәме икән?" - тигән һорау ҡуйҙы. Ул ауылдарға барып, ундағы халыҡҡа эшҡыуарлыҡ өсөн мөмкинлектәр, уның хоҡуҡи яҡтарын, дәүләт биргән ярҙамды аңлатып йөрөүсе " десант" ойоштороу тәҡдиме менән сыҡты. Тәҡдимдең авторы ниәте буйынса, был десантҡа ғалимдар, юристар, эшҡыуарлыҡ менән бәйле чиновниктар, эшҡыуарҙар инергә тейеш. Илшат Ҡужагилдин әйтеүенсә, әгәр ошондай эш алып барылмаһа, аҡыллы фекерҙәр тормошҡа ашмайынса, конференция залы диуарҙары менән генә сикләнеп ҡаласаҡ.

Тағы ла бер мөһим яңылыҡ ишетеп ҡыуанды сараға йыйылыусылар. Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылы ир-уҙамандары ауылда барған үҙгәрештәр, кәртәләр менән килешмәйенсә, проблемаларҙы хәл итеү маҡсатында "Ирегеттәр ҡоро" ойоштороп ебәргән. Айбулат Ғүмәров, Айтуған Хөсәйенов, Амур Әминев, Мораҙым Хәлилов үҙ эштәренән тыш, йәмәғәт эше менән дә шөғөлләнә, ауылдаштарының бер өлөшөнөң эскелек һаҙлығына батыуы, икенселәренең уларҙы ошо һаҙлыҡҡа батырыуы битараф ҡалдыра алмай уларҙы. Бөгөн улар көмөшкәселәргә ҡаршы аңлатыу эше алып бара. Шулай уҡ ауылда төрлө саралар үткәреп, абруйлы ауылдаштары менән осрашыуҙар ойоштороп, ауыл тирәләй сүп-сар өйөмдәрен таҙартыу буйынса өмәләр эшләп, үҙҙәренсә бәләкәй генә булһа ла ғәҙел, өлгө була алырҙай йәмғиәт төҙөйҙәр. Әлеге мәлдә ТОС ойоштороуҙы ла яйға һалғандар.

Ғөмүмән, түңәрәк ҡорҙа ауыл тормошона, уның киләсәгенә битараф булмаған кешеләр ҡатнашты. Шуға күрә лә ҡайһы бер сығыш яһаусыларҙың: "Лидерҙар ҡалаларға китеп бөткән, ауылда пассив кешеләр йәшәй", "Дарвин теорияһындағы кеүек, алкаштар үлеп бөтәсәк, сәләмәт кешеләр генә тороп ҡаласаҡ", "Кешеләргә ярҙам итһәң, улар шашып китәсәк", - тигән кеүегерәк фекерҙәре түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар тарафынан ҡаты тәнҡитләнде. "Мин юғары уҡыу йортон тамамланым. Унан һуң да ауылда ҡалдым, эшем бар, егермеләп кеше минең ҡул аҫтында эшләй. Нисек итеп һин, ауылда йүнле кеше ҡалманы, тип әйтә алаһың?", "Халҡы хаҡында уйлаған кеше кемделер алкаш тип, уға мөһөр таҡмаясаҡ. Һәр кемдең төҙәлеүгә хоҡуғы бар", "Кеше үҙен алкаш тип танымайынса, ул ундай булмаясаҡ", "Кешегә һәр саҡ уның һәйбәт яҡтарын күрһәтеп, шуға өгөтләһәң, үҙгәреп китәсәк", тигән яуап булды тәүгеләргә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бындай конференцияларҙың әһәмиәте ҙур. Уларҙа социаль-иҡтисади, гуманитар, техник йүнәлештәге фәндәр ғалимдары йыйылып, глобаль масштабтағы уртаҡ проблемаларҙы хәл итеү юлдарын бергәләп эҙләй. Ошо сараны үткәреүгә күп көс һалған Ирек Бикмәтов, Фитрат Йомағужиндар маҡтауға лайыҡ. Шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ойоштороусылар исемлегенә инеүе, түңәрәк ҡор ойоштороуы конференцияға эшлеклелек өҫтәүен дә билдәләмәй булмай. Был конференцияның ҡаҙаныштарын теоретик киңлектән ғәмәли киңлеккә сығарыуға булышлыҡ итте лә инде.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Даими аласыҡ нигеҙен ергә ҡағып ултыртылған дүрт бағана тәшкил итә. Ике йәки өс бағана буй стеналарға аралаштырып, ике бағана арҡыры стена буйына ҡуйылған. Арҡыры стеналарҙың һайғауҙары өҫ яҡта саталанып, уларға арҡыры һайғауҙар - урҙа һалына, улар ҡыйыҡты - ябыуҙы тотоп тора. Аласыҡтың ғәҙәти дәүмәле 3,5х4 метр була, стена бағаналарының бейеклеге - 2 метр самаһы. Ябыуҙы тотоп тороусы һайғауҙар бер аҙ оҙонораҡ. Аласыҡ тыштан ҙур ҡабыҡтар менән көпләнә, түбәһе лә шулай ябыла. Шулай уҡ ҡайһы берҙә аласыҡ туҙ, ҡарағас һәм хатта ҡарағай ҡабығы менән көпләнә. Аласыҡтың бер яғында, түбәне тотоп тороусы һайғауҙар араһында ишек ҡуйыла, бер ваҡытта ла тәҙрә уйылмай.

Ҡабыҡ аласыҡ Көньяҡ Уралдың көнбайыш битләүе башҡорттарына хас була. XIX быуат һуңында Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында ла, башҡа территорияларҙа ла осрай. Ауыл ихаталарында төҙөлгән һәм йәйге торлаҡ булып хеҙмәт иткән ҡабыҡ аласыҡтар киңерәк таралыу ала. Ауылда аласыҡ төҙөү өсөн һәр саҡ әрсемә ҡабыҡ файҙаланылмай, ә төп материал булып күгәмә йәки һалабаш ҡабыҡ, йәғни һалабаш һыҙырып алғандан һуң ҡалған ҡабыҡ ҡулланыла.

Формаһы һәм ҡоролошо буйынса ҡабыҡ аласыҡтан бер нәмәһе менән дә айырылмаған туҙ аласыҡ иһә бик һирәк осрай. Миңә уны бары тик башҡорттарҙың Урал һәм Ҡырҡты армыттарындағы йәйләүҙәрендә генә күрергә тура килде. Ҡарағас һәм ҡарағай ҡабығы менән көпләнгән аласыҡ Ағиҙел йылғаһы үрендәге йәйләүҙәрҙән ситкә таралмаған.

Аласыҡтың эсендә усаҡ та, һике лә юҡ. Хужалыҡ кәрәк-ярағы өсөн мөйөштәр һәм ишек эргәһендәге урын бүленгән. Иҙәнгә балаҫтар һәм кейеҙ түшәлгән. Ҡайһы берҙә ҡабыҡ йәки септә өҫтөнә түшәк һәм мендәрҙәр өйөлгән. Бик һирәк кенә был ҡоролмалар ике яҡлы булған, йәғни ике аласыҡ йәнәш ҡоролған. Бындай осраҡтарҙа бер яҡ солан ролен үтәп, барлыҡ һауыт-һаба, кәрәк -яраҡ шунда һаҡланған, ә икенсе яҡ торлаҡ булып хеҙмәт иткән. Ҡайһы берҙә беренсе аласыҡҡа усаҡ сығарылған.

XIX быуат һуңында башҡорттарҙа таҡта аласыҡтар күренә башлай. Уларҙың бер нисә төрөн крайҙың төрлө урындарында күрергә була (һүрәт). Был бәләкәй өйҙәрҙең таҡта стеналары ергә ҡаҙып ултыртылған мөйөш бағаналарына нығытыла, тәҙрә уйылмай, әммә ҙур ғына



ишек ҡуйыла; ике яҡлы ҡыйыҡ та таҡта менән ябыла, әммә ҡайһы берҙә уны киндер алмаштыра; бик һирәк аласыҡ эсенә тимер мейес ултыртыла. Таҡта аласыҡ ауылдарҙа төҙөлә. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарында дүрт мөйөшлө, ишек-тәҙрәле, иҙән-түбәле күсереп йөрөтмәле ағас аласыҡтар күрергә тура килде. Улар ерҙә ултыра һәм махсус тәгәрмәсле оҙон арбаларҙа бер урындан икенсеһенә күсерелә.

✓ Ә Сибай ҡалаһындағы институтҡа килгәндә, мин бында уҡырға бала саҡтан хыялландым. Сөнки уның абруйы юғары беҙҙең яҡтарҙа. Өҫтәүенә, Сибай ҡалаһы беҙҙең районға яп-яҡын бит, ҡайтып йөрөүе лә уңайлы.



# БЕҘҘЕҢ УҠЫУ

## йәғни Сибай институты

**Шахмат буйынса донъя чемпионы Гарри Каспаровтан кемдер: "Партия ваҡытында нисә йөрөштө күҙаллай алаһығыҙ?" - тип һорағас, ул: "Шахматта күпме йөрөштө алдан планлаштыра белеүең мөһим түгел, ә ошо мәлдә ситуацияны ни тиклем яҡшыраҡ анализлауың мөһим", - тип яуап биргән. Был яуабы менән ул, моғайын, "шахматты аңлайым", тип маһайыусы күп кенә "белгестәрҙең" танауына ла сирткәндер... Бөгөнгө һөйләшеү тап ана шулай, сәбәләнмәй, "бөгөнгө хәлдән сығып" фекер йөрөтөргә өйрәнгән, халҡыбыҙҙың бөгөнгө хәлен аңларға тырышҡан йәштәребеҙ ҡатнашлығында үтәсәк. БДУ-ның Сибай институты студенттары - иҡтисад факультетының 3 курс студенты Нәркәс Исҡужина, филология факультеты башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенең 4-се курс студенттары, игеҙәктәр - Филүзә менән Дилүзә Ефимовалар, юридик факультеттың тарих бүлеген тамамлау алдында тороусы Ғәзинур Яратов, технология факультетының 3-сө курсында уҡыусы, "Еңмештәр" КВН командаһы ҡатнашыусыһы Руслан Йәркәев менән тәрбиәлелек, рухлылыҡ төшөнсәләре, институт тормошо тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

▸ **Тиҙҙән Берҙәм дәүләт имтихандары, унан ары - юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү башланасаҡ. Бер-нисә йылға артҡа ҡараш ташлап, һеҙҙең абитуриент сағығыҙға әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Сибайҙа уҡыу теләге һеҙҙә күптән барлыҡҡа килгәйнеме, әллә бөтән ҡалала уҡырға самалай инегеҙме?**

**Филүзә:** Мәктәптә (Йылайыр районы Йылайыр ауылы мәктәбендә) уҡыған сағымда юрист булырға хыялландым. "Ҡайҙа уҡырға?" тигән һорауға килгәндә, Өфөлә булмаһа - Стәрлелә, ахыр сиктә, Бөрө ҡалаһында, йә Магнитогорскиҙа уҡырмын, тип уйлай инем. Ҡайҙалыр уҡырға инеп ҡарар өсөн тәүҙә документтар тапшырырға кәрәк бит инде. Тап шул документтарҙы тапшырған ваҡытта юридик факультет ишеген шаҡырға ҡыйыулығым етмәне лә ҡуйҙы: БДИ балдарым етерлек түгелдер, тип ҡурҡтым. Уның ҡарауы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенә инеп ҡарарға тәүәккәллегем дә, дәртем дә, ышанысым да сиктән ашҡайны. БДИ һөҙөмтәләренең күсермәһен әлеге ҡалаларҙағы уҡыу йорттарына тапшырғас, документтарымдың төп нөсхәһен Сибай институтының журналистика буйынса өҫтәмә белем биреүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенә ебәрҙем. Күп тә үтмәй, "Һеҙ уҡырға индегеҙ", тигән һөйөнөслө хаттар килә лә башланы. Документыбыҙҙың төп нөсхәһен алайыҡ та, Өфөгә илтәйек, тип, Сибайға килгәйнек, бында: "Әлегә беҙгә инеү-инмәүегеҙ билдәле түгел, шуға көтөгөҙ инде", - тинеләр, документтарҙы алмай торорға тәҡдим иттеләр. Ниһайәт, Сибай институтына ла инеүебеҙ мәғлүм булды.

Игеҙәгем Дилүзә менән бергә уҡырға күптән ҡарар иткәйнек инде. Ул ҡайҙа - мин шунда. Ул да, мин дә ошо бүлектә уҡырға булдыҡ. Уҡый башлағайныҡ, институт ныҡ күңелгә ятты ла ҡуйҙы. Әйткәндәй, журналистика өлкәһендә әлегә уңыштарыбыҙ менән маҡтана алмаһаҡ та, үҙебеҙҙә алға китеш һиҙәбеҙ. Күптән түгел мин ҡаурый көләмемде институттың "Юлдаш" гәзите редакцияһында һынап ҡараным. Ике аҙна практикала булған осорҙа гәзит эше үҙенә ылыҡтырҙы, ошо өлкәлә эшләү теләгемде арттырҙы.

**Дилүзә:** Мин дә Сибайҙа уҡырмын, тип уйламай инем. Баштан уҡ күңелем ниңәлер Өфөгә тартылды. Баш ҡалалағы берәй уҡыу йортонда дизайнер һөнәрен үҙләштерһәм ине, тип хыялландым. Сибайҙа ла технология факультеты барлығын һуң ғына белеп ҡалдым. Хыялымды әлегә ситкәрәк ҡуйып торорға тура килде, киләсәктә уны тормошҡа ашырырмын да, бәлки. Шулай ҙа, журналистика өлкәһендә эшләмәсмен, тип тә әйтеп булмай. Әлегә бары шуны әйтә алам: "Сибайский рабочий" гәзитендә үткән практикам ваҡытында яҙышып, материал туплап, башҡортсанан-руссаға тәржемәләр эшләгәндән һуң, "Мин дә яҙыша алам икән", тигән ышаныс барлыҡҡа килде. "Филология факультетында уҡыуың һиңә тағы ниндәй файҙа бирҙе?" тип һораһалар, башҡортса иркенерәк аралаша башланым, тип әйтер инем. Башҡорт мөхите, әҙәби китаптар уҡыу - былар барыһы ла, иртәме, һуңмы, үҙ емештәрен бирә икәнлегенә инандым. Ҡыҫҡаһы, тәүҙә бында уҡырға теләгем әллә ни ҙур булмаһа ла, хәҙер тап ошо уҡыу йортон белем алыуым өсөн ҡыуанып бөтә алмайым. Әйткәндәй, беҙ ҡатнаш ғаиләлә тыуғанбыҙ, әсәйебеҙ - башҡорт, атайыбыҙ рус милләтенән. Атайҙы, башҡортса беҙҙән дә һәйбәтерәк белә, тип әйтергә йөрьәт итәм. Беҙҙән башҡорт бүлегендә уҡыясағыбыҙҙы ул бик йылы, ыңғай ҡабул итте.

**Нәркәс:** Сибай институтында иҡтисад факультетында уҡыясағымды күптән хәл иткәйнем. Дөрөҫөрәге, ағай-апайҙарым иҡтисадсылар булғас, артыҡын уйлап тороуҙың кәрәге лә булманы. Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләрен алып, бер ҙә икеләнеп тормай, документтарымды тыуған ҡаламдағы институтҡа тапшырҙым. Ошондай ҡарарға килеүемә хәҙер ҙә үкенмәйем, хатта шатмын. Артабан магистратурала уҡырға һәм үҙ һөнәрем буйынса эшләргә теләгем ҙур.

**Руслан:** Мин өлкән синыфтарҙа уҡығанда хәрби кеше булырға хыялландым. Ни өсөн тиһегеҙме? Егетмен тигән егет әрмелә хеҙмәт итергә тейеш инде ул. Шуға ла минең мәктәптән һуң хәрби училищеға, унан ары - хәрбиҙәрҙе әҙерләгән берәй академияла уҡыуым килде. Өҫтәүенә, үҙебеҙҙең туғандар араһында тәүге офицер буласаҡмын, тигән уй ҙа тынғы бирмәне. Бына, мәктәпте (Әбйәлил районы Таштимер урта мәктәбен) лә тамамланыҡ, ҡулға өлгөргәнлек аттестатын да алдыҡ. Алда - хыял, "барыһы ла үҙ ҡулымда, ҡайҙа теләйем, шунда осам", тип, ҡанатланып йөрөгән саҡ. Атаәсәйем менән кәңәшләшкәс, Пермь ҡалаһындағы Эске эштәр министрлығының хәрби институтына юлландыҡ. Атай машина менән алып килде. Документты тапшырғайныҡ, беҙҙе, абитуриенттарҙы, тоттолар ҙа, бер көнгә казармаға ябып та ҡуйҙылар. Бына һиңә - мә, әрмегә эләктең, малай, мин уйлайым. Атай ҡунаҡханала ҡунды. Иртәгәһенә, яраға тоҙ һалып, ауылдан әсәй шылтырата: "Улым, биш йыл буйы ситтә зарығырһыңмы? Аҙаҡ үкенерһең, әллә ҡайтаһың да ҡуяһыңмы?" - ти. Аңлап торам: бында ҡалһам, оҙаҡҡа ҡалырға тура киләсәк. "Офицер булам, тигән хыялымды ҡайҙа ҡуйырмын?" тип, ҡаты уйҙарға бирелеп ултырыуым әлегеләй хәтерҙә. Ул мәлдә минең киләсәк тормошом тик үҙемдең ҡулда икәнен аңлау, бер яҡтан, дәртләндерә, икенсе яҡтан, һағайта ла ине. Хәҙер һөйләүе генә анһат. Документтарымды кире һорап алып, ҡайтып киттем. Әйткәндәй, Мәскәү дәүләт университетынан да саҡырып, шылтыратҡайнылар. Ләкин әсәй Мәскәүгә лә ебәреүҙән баш тартты. Эргәләге Магнитогорскиға үҙемдең барғым килмәне. Шулай һайлана торғас, Сибай тарафтарына юл тоттоҡ. Сибай институтының иҡтисад факультетында бер туған апайым уҡый ине. Ул минең документтарҙың төп нөсхәһен институттың технология факультетына, ә күсермәһен Башҡорт дәүләт аграр университеты филиалына тапшырҙы. Ике урынға ла конкурстан үттем. Атайым: "Һайла инде, сепараторҙар һүтәһеңме, әллә машинамы?" - тигәс, уйланым-уйланым да, бәләкәй саҡтан атайға машинаһын йүнәтешергә ярҙам итеп үҫкәнгә күрә, үҙем яраткан өлкәлә - машиналар менән эш итеү талап ителгән машиналарҙы эксплуатациялау һәм машиналар технологиялары бүлегендә уҡырға булдым.

**Ғәзинур:** Баймаҡ районы Кәрешкә ауылынан мин. Урта белемде Баймаҡ лицей-интернатында алдым. Тарих факультетына уҡырға инер өсөн урау юлды буйлап йөрөмәнем. Беҙҙә, Яратовтарҙа, тарих фәненә мөнәсәбәт үҙенсә: ике туған ағайым Рөстәм менән ҡустым Арыҫлан (әйткәндәй, әле уның менән бер бүлектә, бер курста уҡыйбыҙ) да тарих факультетын һайланы. Ә Сибай ҡалаһындағы институтҡа килгәндә, мин бында уҡырға бала саҡтан хыялландым. Сөнки уның абруйы юғары беҙҙең яҡтарҙа. Өҫтәүенә, Сибай ҡалаһы беҙҙең районға яп-яҡын бит, ҡайтып йөрөүе лә уңайлы. Тарих фәненә килгәндә, тарихтың урта быуаттар осоро менән ныҡлап ҡыҙыҡһынам. Айырыуса дала цивилизацияһы осоро күңелгә яҡын. Нимәһе менән оҡшай? Башҡорт халҡының бер вәкиле булғаным өсөн оҡшайҙыр, бәлки. Ҡан тарта, тигәндәре шулдыр.

▸ **Мин үҙем дә ошо уҡыу йортон тамамлаған кеше булараҡ, бындағы тәртипте яҡшы беләм. Уҡыу биналарына ингән ерҙә һәр саҡ бәһлеүәндәй батырҙар һаҡта тора, ситтән бер кемде лә индермәйҙәр. Шуға, институт территорияһында, уның янында тәмәке тартып тороусы студенттарҙы күрмәҫһең дә. Ятаҡтарҙа, вахтерҙарҙан тыш, талапсан һаҡсылар тәртип һаҡлай, уҡыу йортоноң һәр факультетында дежур студенттар ултыра, йәғни, эш боҙоу мөмкинлеге тамырынан юҡ ителә. Сибай институтында ҡуйылған тәртип талаптарынан тыш, был уҡыу йорто башҡа уҡыу йорттарынан тағы ҡайһы яғы менән айырылып тора?**

**Руслан:** Уҡытыусыларҙың да, техник хеҙмәткәрҙәрҙең дә, студенттарҙың да күпселеген башҡорттар тәшкил иткәнгә күрә, тәртип тә бында "башҡортса", йәғни халыҡсан ҡуйылған. Институттың ир-егет уҡытыусыларын - ҡанбабалар, ҡатын-ҡыҙҙарҙы - ағинәйҙәр, ә етәкселекте - аҡһаҡалдар менән тиңләһәң дә, арттырыу булмаҫ.

Беҙҙә уҡытыусылар менән дә, институтҡа килгән сит кешеләр менән дә иҫәнләшеү ғәҙәткә ингән. Башҡа вуздарҙа ла булғаным бар - был күренеш ул тиклем күҙгә ташланмай. Иҫәнләшеп үтеү түгел, хатта юл да бирмәйҙәр. Хәйер, был тәрбиәһеҙлек күп кенә учреждениеларҙа ла күҙгә салына шул... Ә тәрбиәле булыу матур итеп иҫәнләшеүҙән башлана. Икенсенән, институтта студенттың өҫ кейеменең ыҫпайлығына, уңайлылығына етди иғтибар бирелә. Костюм кейеү мотлаҡ түгел, ләкин ыңғай күренеш һанала. Тағы, беҙҙең институтта ғына булһа кәрәк, һәр студент түшенә үҙенең исем-шәрифе, уҡыған факультеты яҙылған бейджик тағып йөрөтөргә бурыслы. Был да бик йоғонтоло тәрбиә алымы миңә ҡалһа. Эш боҙһаң, һинең ҡайһы факультеттан икәнлегеңде күреп торалар. Икенсе яҡтан, исем-шәрифеңде күрһәткән "алтаҡта"-бейджик студенттың үҙбаһаһын, дәрәжәһен күтәреп ебәрә. Башҡа уҡыу йорттарында бындай күренеш бармы, юҡмы - әйтә алмайым.

**Нәркәс:** Сибай институтын башҡа уҡыу йорттары менән сағыштырғанда, иң тәүгә студенттарҙың халыҡ-ара, төбәк-

*Беҙҙә уҡытыусылар менән дә, институтҡа килгән сит кешеләр менән дә иҫәнләшеү ғәҙәткә ингән. Башҡа вуздарҙа ла булғаным бар - был күренеш ул тиклем күҙгә ташланмай. Иҫәнләшеп үтеү түгел, хатта юл да бирмәйҙәр. Хәйер, был тәрбиәһеҙлек күп кенә учреждениеларҙа ла күҙгә салына шул... Ә тәрбиәле булыу матур итеп иҫәнләшеүҙән башлана. Икенсенән, институтта студенттың өҫ кейеменең ыҫпайлығына, уңайлылығына етди иғтибар бирелә. Костюм кейеү мотлаҡ түгел, ләкин ыңғай күренеш һанала. Тағы, беҙҙең институтта ғына булһа кәрәк, һәр студент түшенә үҙенең исем-шәрифе, уҡыған факультеты яҙылған бейджик тағып йөрөтөргә бурыслы. Был да бик йоғонтоло тәрбиә алымы миңә ҡалһа.*

***✓ Көньяҡ-көнсығыш төбәктә тәүге юғары белем усағының барлыҡҡа килеүе - тап Зиннур Ғәбәйҙулла улының фиҙакәрлек емеше: ул туплаған коллектив ике тиҫтә йыл эсендә "Сибай институты" брендын булдырған.***

# ЙОРТО БЕРӘҮ ГЕНӘ,

## студенттар күҙлегенән



ара кәңәшмәләрҙә лайыҡлы сығыш яһауын телгә алғы килә. Беҙҙең студенттар бер ҡасан да институт йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтергәне юҡ: ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә, тәрбиәле, белемле булыуҙары менән айырылып торалар. Уҡытыусыларыбыҙҙың педагогик әҙерлеге тураһында әйтеп торорға ла кәрәкмәй. Яңыраҡ ҡыҙыҡһынғайным, 185 уҡытыусының 60 проценты ғилми дәрәжәгә эйә: 10 фән докторыбыҙ, 107 фән кандидатыбыҙ бар икән. Ошо һанап үтелгәндәр Сибай институтын Рәсәй вуздары кимәленә күтәрелергә мөмкинлек бирә, минеңсә.

**Филүзә:** Бөтә юғары уҡыу йорттарында ла тәрбиә эше беҙҙәгесә түгел икәнен ишетеп беләбеҙ. Беҙҙең институтта бер студент дәрес ҡалдырһа, уҡытыусыһы, хәүефләнеп, студентҡа шылтырата башлай. Сөнки Сибай институты студенттары бер сәбәпһеҙ дәрес ҡалдырмай. Уҡытыусылар ҙа шуға күнеккән. Ә һуңламау, сәбәпһеҙ эш йә уҡыу ҡалдырмау ғәҙәте уҡыуҙа ғына түгел, тормошта кәрәк сифат бит. Күп тапҡыр башҡарылған ғәмәл тәүҙә - ғәҙәткә, артабан холҡоңа әүерелә, тиҙәр. Студенттарҙың тәртибе лә шулай яйлап-яйлап нығына һәм улар эшләй башлағас та яуаплы хеҙмәткәр булып таныла. Ҡайһы бер һабаҡташтар: "Ниңә беҙҙең уҡытыусылар беҙҙең ҡайһы бер етешһеҙлектәргә ҡул һелтәп кенә ҡарамай икән, үҙҙәренә еңелерәк булыр ине", - тип һөйләнеп алғылай ул, әлбиттә.

**Дилүзә:** Ул яҡтан мин институтта алып барылған тәрбиә ысулдары менән тулыһынса килешәм. Студентҡа тулы ирек бирҙеңме, ул ялҡаулана башлаясаҡ. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең халыҡта балаларҙы, йәштәрҙе тәрбиәләүҙең бер алымы - ул тыйыу. Баштан уҡ шулай өйрәткәс, беҙҙең уҡыу йорто студенттары тыйғандан тыйыла белә, шулай улар яуаплылыҡҡа, тәртипкә өйрәнә.

**Ғәзинур:** Тарихта боронғо Грециялағы Афины ҡалаһы тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һаҡланған. Был ҡала сәскә атҡан дәүерҙә мәҙәниәт тә, фән дә алға китҡән булған. Матурлыҡ төшөнсәһе бар нәмәләрҙән дә өҫтөн ҡуйылған. Ҡала урамдарында аллаларға, олимпия чемпиондарына, драматургтарға һәйкәлдәр төҙөлгән. Беҙҙең институтта ла ошо йүнәлешкә - уҡыу биналарын, коридорҙарҙы, институт ихатаһын башҡорттоң арҙаҡлы ул-ҡыҙҙары скульптуралары, халҡыбыҙ тарихының дәһшәтле ваҡиғаларын сағылдырған һәйкәлдәр менән биҙәүгә ҙур иғтибар бирелә. Үҙ биләмәһен халыҡ шағирҙары, халыҡ сәсәндәре, халыҡ яҙыусылары, мәғрифәтселәре һәйкәлдәре менән биҙәгән уҡыу йорто Рәсәйҙә генә түгел, донъяла ла берәү генәлер ул! Бына ошондай композициялар араһында уҡыу, эшләү - үҙе үк ижадҡа ылыҡтыра, матурлыҡҡа иғтибарҙы көсәйтәләр, минеңсә.

**Руслан:** Һәр уҡыу йортоноң йөҙөн, тәү сиратта, уҡытыусылар коллективы ла билдәләй. Беҙҙең факультет коллективының төп өлөшөн ир уҡытыусылар тәшкил итә. Агайҙар менән эш итеүе еңел - һине ярты һүҙҙән аңлап торалар, кәрәк икән, хәләнә кереп, дәрестән дә ебәрәләр. Беҙҙең декан Азат Сәлимйән улы Вәлиевтың дәрестәре бигерәк тә йәнле үтә. Ул - талапсан, шул уҡ ваҡытта дәресен шул тиклем мауыҡтырғыс ҡора белгән педагог. Уның дәресендә йоҡлап та китмәйһең. Ысын уҡытыусы уның һымаҡ булырға тейештер, моғайын. Мин, ғөмүмән, уҡытыу системаһында ир-егеттәр күберәк эшләһен, тип барам. Уларҙың рух төшөнсәһе, йә булмаһа, теоретик материал тураһында ҡатлы-ҡатлы, ҡатмарлы һүҙҙәр һөйләп ултырмауы ла мөмкин - тормоштан бер-ике миҫал килтерә лә, аңлатып та бирә...

▸ **Руслан, беҙ һине "Еңмештәр" тип исемләнгән КВН төркөмөндә уйнаусы итеп тә беләбеҙ. Үҙегеҙҙең команда тураһында һөйләп үт әле. Һеҙ башҡорт рухындағы юмор менән алдыраһығыҙ һәм башҡа командаларҙан айырылып тораһығыҙ. Һеҙ көлкө сәхнәләрен үҙегеҙ уйлап сығараһығыҙмы?**

**Руслан:** Мине КВН-ға нисек һайлап алдылар? Беренсе курста бер сарала ҡатнашҡайным. Сәхнәнән төшөүем булды, яныма бер-нисә егет килде лә: "Беҙ КВН командаһы төҙөйбеҙ, әйҙә, беҙҙең менән уйнап ҡарайһыңмы?" - тип, үҙҙәренә саҡырҙылар. Беренсе курста саф башҡорт телендә сығыш яһауы ҡыйыныраҡ була торғайны. Репетицияларҙа үҙебеҙҙең телмәргә ныҡ иғтибар итә, бер-беребеҙҙең хаталарын төҙәтә торғас, яйлап башҡортса телебеҙ-телгә йоҡмай башланы. Шул уҡ ваҡытта телмәребеҙҙе мөмкин тиклем йәнлерәк итергә лә тырыштыҡ. Был яҡтан башҡортса ғәжәп матур итеп һөйләшеүсе татар егетебеҙ Шамил Солтановты билдәләге килә. Башҡорт Асыҡ КВН лигаһының финал уйынында, капитандар бәйгеһендә, бик уңышлы сығыш яһаны. Уның: "Минең телмәремдә "башҡорт шрифты бар, ә кемдәләр был шрифт юҡ", тип, башҡортса һөйләшә белмәүселәргә тәнҡитләүе тамашасылар хәтерендә уйылып ҡалды.

▸ **Сибай институтындағы рух тағы ниндәй сараларҙа, күренештәрҙә сағыла?**

**Ғәзинур:** Уҡытыусылар беҙҙә тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә, туған телебеҙгә һөйөү уятырға тырыша...

**Дилүзә:** Былтыр Сибай ҡалаһының үҙәк майҙанында Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын яттан һөйләүселәр флешмобы үткәйне. Был сараны Сибайҙа тап беҙҙең институт студенттары һәм уҡытыусылары ойошторҙо. Майҙанға килеүселәр, сәхнәнән шиғыр һөйләүселәр араһында рус милләтле уҡыусыларҙың да булыуы күптәрҙе, шул иҫәптән, мине лә, һоҡландырҙы.

**Нәркәс:** Институтта йыл һайын һабантуй байрамы ла үтә. Бында һәр факультет бер тирмә ҡора, ул тирмәләр Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың мәҙәниәтен сағылдыра. Студенттар ҙа, уҡытыусылар ҙа был сарала әүҙем ҡатнаша.

Тағы, Сибай институты студенттары араһында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр күп, улар филология факультетында ғына түгел, башҡа факультеттарҙа ла белем ала. Мәҫәлән, юридик факультетта уҡыусы рус егете Виталий Колесников, иҡтисад факультетынан Рөстәм Садиҡов - "Урал батыр" эпосының күп өлөшөн яттан белә.

Милли ҡомартҡыларыбыҙҙан һаналған көй-моңдарыбыҙҙы, бейеүҙәребеҙҙе халыҡҡа еткереү маҡсатында ойошторолған "Арман" этно-фольклор төркөмөбөҙ, "Ете ырыу", "Сармат" бейеү ансамблдәребеҙ менән дә сикһеҙ ғорурланабыҙ. Армандар былтыр Тыва республикаһында үткән фестивалдә лә ҡатнашты.

Әйткәндәй, 19 апрель Өфө Иҡтисад һәм сервис университетында студенттар араһында иҡтисад буйынса республика олимпиадаһы үткәйне. Был олимпиадала Сибай институтының иҡтисад факультетынан да 9 студент ҡатнашты. Улар араһында мин дә бар инем. Шулай итеп, 14 команда араһынан беҙ, сибайҙар, дәрәжәле 2-се урын яулай алдыҡ. Өс студентыбыҙ төрлө номинациялар буйынса 1-се, 2-се урындарға лайыҡ булды. Рәсәй филиалдары, Өфө дәүләт авиация техник университеты кеүек абруйлы уҡыу йорттары студенттары араһында сығыш яһарға мөмкинлектәр булдырған институт етәкселегенә рәхмәтебеҙҙе еткергебеҙ килә.

**Ғәзинур:** Эйе, был уңыштар, әлбиттә, күмәк эш һөҙөмтәһе лә. Халҡыбыҙҙа "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тигән әйтем бар. Шулай ҙа, уҡыу йортобоҙҙоң бар уңыштарын, ҡаҙаныштарын тәьмин итеүсе, барыһын да бергә туплаусы бер көс, бер кеше бар икәнлеген дә онотторға ярамай.

**Нәркәс:** Фекерҙе күтәреп алыуың өсөн рәхмәт, Ғәзинур! Ысынлап та, күҙ алдына килтереүе лә ауыр, директорыбыҙ Зиннур Йәрмөхәмәтов булмаһа, институт бөгөнгө хәлендә йәшәр инеме икән? Юҡ, әлбиттә. Көньяҡ-көнсығыш төбәктә тәүге юғары белем усағының барлыҡҡа килеүе - тап Зиннур Ғәбәйҙулла улының фиҙакәрлек емеше: ул идеаль коллектив туплаған, ошо коллектив ике тиҫтә йыл эсендә "Сибай институты" брендын булдырған. Беҙҙең студенттарҙың белем сифатын, әҙерлек кимәленең юғарылығын республика хеҙмәт баҙарында юғары баһалайҙар. Шул уҡ "Киске Өфө" гәзитендә генә лә, ишетеүебеҙсә, беҙҙең институтты тамамлаған 3 хеҙмәткәр эшләй, тинеләр...

***Бөтә юғары уҡыу йорттарында ла тәрбиә эше беҙҙәгесә түгел икәнен ишетеп беләбеҙ. Беҙҙең институтта бер студент дәрес ҡалдырһа, уҡытыусыһы, хәүефләнеп, студентҡа шылтырата башлай. Сөнки Сибай институты студенттары бер сәбәпһеҙ дәрес ҡалдырмай. Уҡытыусылар ҙа шуға күнеккән. Ә һуңламау, сәбәпһеҙ эш йә уҡыу ҡалдырмау ғәҙәте уҡыуҙа ғына түгел, тормошта кәрәк сифат бит. Күп тапҡыр башҡарылған ғәмәл тәүҙә - ғәҙәткә, артабан холҡоңа әүерелә, тиҙәр. Студенттарҙың тәртибе лә шулай яйлап-яйлап нығына һәм улар эшләй башлағас та яуаплы хеҙмәткәр булып таныла.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер дәрестә яратҡан уҡытыусыбыҙ Әмир Мисбах улы Ҡотләхмәтов: "Уҡып бөткәс, ҡайһы берегеҙҙең уҡытыусыһы булып эшләргә теләмәүе лә мөмкин. Мин бының өсөн артыҡ борсолмайым да. Әгәр барығыҙ ҙа балаларығыҙҙы, ейәндәрегеҙҙе ысын башҡорт итеп тәрбиәләһә, уларға беҙ һеҙгә һалған рухты һеңдерә алһа, тимәк, беҙ үҙ бурысыбыҙҙы тулыһынса үтәгәнбеҙ, тигән һүҙ", - тигәйне. Был һүҙ кемгә нисек тәьҫир иткәндер, ә мин уны бөгөн дә тормош маяғым итеп иҫтә тотам.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

**✓ Фитрат Ғәлимйәнгә ысын атай һымаҡ булды. Бәлки, бик күп ысын атайҙарҙан да яҡшыраҡтыр... Сабыйҙың атаһы икенсе кеше булыуы хаҡында бер ваҡытта ла ҡатынының иҫенә төшөргәне юҡ һәм төшөрәсәк тә түгел ул.**




* * *

Бер-ике ай тирәһенән Рәхилә Мишаһына үҙенең балаға уҙғанлығын һөйөнсөләне.

-Ауырлы?.. - тип ҡабатлап һораны тегеһе ҡапылда аңламаған кешеләй. Бындай яңылыҡты ишеткән Мишаның сәс бөҙрәләре турайып киткәндәй булып тойолдо.

-Эйе, йәнем, - тине Рәхилә, егеттең күҙҙәренә ҡараны. Тик Миша ҡаушағандай, бур кеше һымаҡ, күҙҙәрен ҡыҙҙың ҡарашынан йәшерергә ашыҡты. Әллә ни көн эҫе булмауына ҡарамаҫтан, егеттең маңлайына кинәт кенә тир бәреп сыҡты.

- Шулай уҡ тиҙме ни?..

- Тиҙ генә була икән шул...

Башҡаса бер-берећенә әллә ни әйтер һүҙ ҙә тапманылар. Ошоғаса оҫта, йор һүҙле Мишаны һәр төрлө нәфис һүҙҙәренән, көләмәстәренән туҡтатып та алып булмай ине тиерлек. Рәхиләнең балаға уҙыу хәбәре уны шулай "һыу ортларға" мәжбүр итте. Бик һалҡын ғына хушлаштылар.

Киләһе осрашҡанда Миша ныҡ ҡына ҡыҙмаса ине. Рәхилә менән уғата ла тупаҫ мөғәмәләлә булды. Уның ике һүҙенең береһендә "аборт" ине...

- Һин по-понимаешь, институтта уҡыуы нисек ҡатмарлы икәнен?.. - тине ул күп эсеүҙән мөйөштәрендә аҡ күбек йыйылған иҫерек күҙҙәрен аҡайтып, тотлоға-тотлоға. - Институт - һеҙҙең мәхлүк училище түгел. Бер сопр-сопромат ҡына үҙе ни тора! Һин бит уның "с" хәрефен дә ишеткәнең юҡ...

- Һинең сопроматың - үҙеңдең эшең... Әммә мин булаҫаҡ балабыҙҙың бәхетен уйлайым, - тине Рәхилә илар сиккә етеп. - Яҡшы ғына йәшәп ятҡан студент ғаиләләре бар икәнен һин үҙең үк әйтә инең бит... Беҙ ҙә йәшәрбеҙ әле, бер нисек итеп. Өҫтәүенә, йәйгә мин училищены тамамларға торам.

- Фи, һинең училище... Төкөрҙөм мин һинең кулинарыңа, - Мишаның йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу сыҡты. Ситкә ҡарап төкөргән ҡуйы төкөрөгө ергә төшөп етмәй, ирендәре ситендә эленеп тора бирҙе. Ҡулының һыртын сылата-сылата ерәнесле, еүеш ауыҙын һөрттө лә тағы дауам итте. - Короче, йә һин абортҡа бараһың, йә беҙҙең арала башҡаса бер ниндәй ҙә мөнәсәбәт булмай...

- Мин уйлап ҡарармын...

- Уйла.

Улар шулай һалҡын ғына хушлашты. "Уйлап ҡарармын" тип, иҫерек Мишаһы тиҙерәк үҙенең ятағына ҡайтып китһен өсөн генә әйтте ул. Сөнки йөрәк төбөндә әле генә ярала башлаған, йәнендәй күргән яңы бер кешене - үҙенең булаҫаҡ ғәзиз балаһын бер ҡасан да үҙ ирке менән үлемгә бирмәйәсәк ул. Бер генә лә икеләнеүһеҙ Рәхилә шундай ҡарарға килде. Киләһе осрашҡанда Миша, ғәжәпкә, айныҡ ине. Рәхилә уға үҙенең "ауырын өҙҙөргәнен" әйтте. Миша иркен һулағандай итте. Әммә уның күңелен тағы ниҙер борсоғаны һиҙелә ине. Был хаҡта Рәхилә унан һорашып торманы, әммә һуңыраҡ ҡына Мишаның институттан ҡыуылғанын белде. Иҫерек килеш сираттағы мәртәбә милицияға эләккәс, авиация институты студенты Яҡшығолов Миңсәитте был юлы аяп тормағандар. Был турала инде һәр ваҡыт тигәндәй хәмерҙән арына алмаған Миша аҙаҡ үҙе һөйләне.

Балаһының булаҫаҡ атаһы менән әллә ҡасан уҡ мөнәсәбәтен өҙөргә ҡарар иткән Рәхилә бер көндө уның менән бөтөнләйгә һөйләшеп торманы. Был юлы ҡатыраҡ булырға тырышты. "Башҡаса күҙемә күренәһе булма!" тине инде ҡорһағы еңелсә беленә башлаған ҡатын. Йыш ҡына килеп, өсәрлек, йә иһә һырағә тип берәр тәңкәләп аҡса һоранып маҙаһыҙлап йөрөгәненә, ысынлап та, башҡаса түҙеп торорлоҡ хәле ҡалмағайны. Мишаның хәмер эсергә әүәҫләнеп, уҡыу йортонан ҡыуылып сыҡҡаны, моғайын да, уның ата-әсәһенә лә мәғлүм булғандыр. Шуға күрә лә, бер бөртөк улдарының финанс яғын ҡырҡа ҡыҫҡартҡандарҙыр. Оҙаҡламай Мишаны Совет армияһы сафына алғандар, тип ишетте...

Рәхилә уны башҡаса бер ҡасан да күрмәне һәм күргеһе лә килмәне. Мишаның артабанғы яҙмышы Рәхиләгә мәғлүм түгел. Уның был донъяла бармы-юҡмы икәнен дә белмәй ине. Бар, күрәһең...

* * *

Рәхилә әлеге курсташы Гөлмәрйәм менән бер бүлмәлә йәшәне. Бала сағынан йөрәк сире менән яфаланған ошо берҙән-бер әхирәтен ныҡ йәлләй ине Рәхилә. Яҡшы күңелле, изгелекле, илгәҙәк кенә был ҡыҙҙы хатта үҙенең бер туған һеңлеһе кеүек күреп яратты. Йыш ҡына йөрәк өйәнәктәре ҡабатланып торған әхирәтенә "Ашығыс ярҙам" да саҡыртҡыланы ул. Бәләкәсерәк сағында "Бындай сир менән ҡыҙың оҙаҡ йәшәй алмаҫ..." тип, әсәһенә сер генә итеп әйткән докторҙың һүҙҙәрен ишетеп торған Гөлмәрйәм. Шуға күрәлер ҙә, ауырыуының һаман әкренләп көсәйә барыуын тойған ҡыҙ көндән-көн үҙенең һауығып китеренә өмөтөн өҙә барҙы. Был хаҡта ул эс серҙәрен иң яҡын тип һанаған әхирәтенә - Рәхиләгә генә һөйләне. Ҡайғырып, әллә ни илаулап та йөрөмәй, әммә йөҙө һәр саҡ һағышлы. Табиптар тәҡдим иткән операцияға ризалашырға ла ҡурҡа. Ана шул Гөлмәрйәмдең медицина институтында уҡып йөрөгән Фитрат исемле ағаһы уларҙың бүлмәләренә килеп йөрөй торғайны. Киң маңлайлы, һоро күҙле, аҡыллы ҡарашлы, ифрат та тыныс, әҙәпле был егеттең үҙенә ҡарата битараф булмағанын да һиҙҙе Рәхилә. Хатта уларҙың дөйөм ятағына был егет фәҡәт уның өсөн килгән һымаҡ та тойола ине. Әммә үҙенең "булаҫаҡ ирен - Мишаһын бер ҡасан да, бер кем менән дә алыштырасағы юҡ" ине ул саҡта. Рәхилә менән Миша араһындағы саф мөхәббәткә, шундай йылы мөнәсәбәттәренә һоҡланып бөтә алмаған әхирәте Гөлмәрйәм был турала үҙенең ағаһына ла һөйләне.

- Хатта улар быйыл өйләнешергә лә уйлайҙар. Бәпәйҙәре булаҫаҡ... - тине һеңлекәше Рәхилә тураһында ныҡлап ҡыҙыҡһына башлаған Фитратҡа.

-Их, була ла инде донъяла шундай бәхетле кешеләр, - тип ҡуйҙы Фитрат Рәхиләнең булаҫаҡ ирен күҙ уңында тотоп. - Ә кемдер бәхеткә һуңлап ҡала...

Шулай ҙа уларҙың дөйөм ятағына йөрөүен һирәкләтмәне Фитрат. Һеңлекәше янына килгән кеше булып, һәр мөмкинселектән файҙаланып, үҙенең уйсан һоро күҙҙәре менән Рәхиләнең йөҙөнә ҡарап ҡалырға тырыша. Инде ауырлы өс-дүрт айлыҡ булып, биттәре лә бер аҙ үҙгәреп, танау һырттары миңләнә башлаған Рәхилә хатта уға тағы ла матурыраҡ булып тойола...

Һәр саҡ әхирәте менән серләшеп йөрөгән Гөлмәрйәм, әлбиттә, Рәхиләнең хәле тураһында хәбәрҙар булды. Уның Мишаһы менән аралары өҙөлөүен дә шундуҡ белде ул.

- Беләһеңме, Рәхиләкәйем, - тине бер көн Гөлмәрйәм әхирәтен ҡосаҡлап, - ни өсөндөр һине еңгәй иткем киләсе...

- Китсәле, юҡты һөйләмә, - тине Рәхилә бер аҙ асыуланғандай ҙа итеп, - хәҙер мин кемгә кәрәк ошо килеш? - Шунан еңелсә генә беленә башлаған үҙенең ҡорһағына күрһәтте.

- Ә минең Фитрат ағайым һин тип бар аҡылын юйған...

- Кит, булмаҫты... Кеше ышанмаҫ хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә, тигәндәр.

- Ышанырлыҡ хәбәр түгел, әммә - ысын... Элегерәк һиңә һуңлап ҡалдым тип ҡайғыра ине ул. Әле Миша менән һинең аралағы мөнәсәбәтегеҙҙең туҡталыуын белгәс: "Әхирәтең менән һөйләшеп ҡара әле", - тип үтенеп ялынып-ялбарҙы. - Гөлмәрйәм Рәхиләнең сөмҡара ҡуйы сәс толомон тотҡоланы, тулышып бешкән муйылды хәтерләткән күҙҙәренә ҡараны. - Һин ағайыма бар булмышың менән оҡшайһың. Ул ғына ла түгел, һине ысын күңелдән өҙөлөп ярата. Хатта һинең Мишанан ауырлы икәнеңде лә белә.... Бөгөн үк кәләш итеп алыр инем, ти.

- Йәшлек менән шулай тиер ҙә, тора-бара үҙгәреп китһә... - Рәхилә әхирәтен кире ҡағырға ашыҡманы, әммә ҡапыл да ризалашырға ла ҡыйынһынды. - Атай-әсәйегеҙ ни әйтер...

- Беҙҙең атайыбыҙ менән әсәйебеҙ бик яҡшы кешеләр, - тине Гөлмәрйәм. - Бөгөн үк "Рәхилә риза!" тип Фитрат ағайыма әйтәсәкмен, - кескәй балалар һымаҡ сәпәкәйләп алды.

- Туҡта әле, мин бит әлегә бер ни ҙә әйтмәнем дә...

-Әйтмәһәң дә, һиҙәм, Рәхиләкәйем, - әхирәтен ҡосаҡлап уҡ алды Гөлмәрйәм. - Бөгөн үк һөйөнсөләйәсәкмен! - Ҡайҙалыр, нимәгәләр өлгөрмәй ҡалыуҙан ҡурҡҡан кешене хәтерләтә ине уның был ҡыланышы...

....Бер аҙнанан ЗАГСҡа барып ғариза яҙҙылар. Үҙе йәшәгән студент дөйөм ятағында дворник булып эшләп тә йөрөгән Фитратҡа бүлмә бирҙеләр. Рәхилә шундуҡ медицина институты ятағына күсеп килде.

Сираттағы йөрәк өйәнәгенән Гөлмәрйәмде ҡотҡарып ҡала алманылар. Табиптарҙың фаразлауы дөрөҫкә сыҡты. Уның ата-әсәһе, Фитрат ағаһы менән бергә Рәхилә лә был оло юғалтыуҙы - яратҡан бикәсенең үлемен бик тә ауыр кисерҙе. Әммә был хәлде әллә ни көтөлмәгән тип ҡабул итмәгән Фитрат көн дә ҡара яулыҡ ябынып йөрөй башлаған Рәхиләһен йыуатты.

- Ныҡ ҡайғырып, үҙеңде бөтөрмә, - тине ул ҡатынына. - Беҙҙең булаҫаҡ балабыҙға зыяны тейеп ҡуйыуы бар...

Тиҙҙән тыуаҫаҡ бәпесен Фитраты әленән-әле "булаҫаҡ балабыҙ" тип телгә алыуынан майҙай ирей ҙә китә Рәхилә. Үҙенең хәләл ефетенә ҡарата уның ихтирамы тағы ла арта. Балалары - Ғәлимйәне тыуғас, ҡайныһы менән ҡәйнәһе "Ни өсөн балағыҙ иртә тыуҙы?" тип төпсәшмәне. Шундайын да яҡшы ғаиләгә, миһырбанлы кешеләргә тап иткәне өсөн Рәхилә һәр саҡ Аллаһы Тәғәләгә шөкөрана ҡылыр булды.

Изге күңелле Фитрат Ғәлимйәнгә ысын атай һымаҡ булды. Бәлки, бик күп ысын атайҙарҙан да яҡшыраҡтыр... Сабыйҙың атаһы икенсе кеше булыуы хаҡында бер ваҡытта ла ҡатынының иҫенә төшөргәне юҡ һәм төшөрәсәк тә түгел ул. Үҙҙәренең ҡыҙҙары Айгөл донъяға килгәс тә малайға ҡарашы һыуынманы. Ғәлимйән ошоғаса үҙенең башҡа атанан яралғанлығын да белмәй. Шулай яҡшыраҡ булыр, тип ҡарар итте Фитрат менән Рәхилә. Ике баланы ла тиң ҡарап, тигеҙ яратып үҫтерҙеләр. Айгөл дә үҫеп етеп, атаһы һымаҡ табип һөнәренә эйә булды. Үҙенең бергә эшләгән коллегаһына тормошҡа сығып, ике бала үҫтереп, айырым фатир алып, һин дә мин йәшәп яталар. Шуғалыр ҙа, айырыуса һуңғы ваҡытта, "Үҙеңдән өс йәшкә кесе Айгөл һеңлең дә ике бала әсәһе булып китте бит, ә һин һаман буйҙаҡ..." тип, әсәһе Ғәлимйәнен өйләнергә өгөтләй...

Уйҙарының осо-ҡырыйына сыға алмай, Рәхилә таңға ғына йоҡоға китте. Бер-ике сәғәт үтеүгә, Фитрат та алыҫ командировканан ҡайтып төштө.

**(Дауамы бар).**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

## ДОНЪЯ ҺӘР САҠ...
### ике яҡлы

- Оҙон телдән баш ауырый, әсеһенән күңел әрней.
- Көнсөл кеше - тере мәйет, үҙен-үҙе утлы ситлеккә бикләй.
- Донъя ғәләмәте бәреп-һуҡҡылаһа ла үҙең булып ҡал: оҙаҡ хәтерләрҙәр.
- Ғүмер кисереү - сәнскеле үлән өҫтөндә йөрөүгә, тулҡындарҙа батып-сумыуға тиң.
- Донъя ул ике яҡлы: бер миҙгеле гел шатлыҡ килтерһә, икенсеһе борсоу, уттарға һала.
- Дуҫты ла, дошманды ла уртаса ҡабул ит: дуҫ - дошманға, ә дошман дуҫҡа әйләнеүе бара.
- Ысын дуҫ - еҫле май, ялғаны - төтәгән усаҡ.
- Яңылышыу ҙа онотоу - яуапһыҙҙың "һөнәре".
- Аманатҡа хыянат - йүгерек ҡулдың "кәсебе".
- Ауыҙыңдағы һүҙгә генә һин эйә, ауыҙҙан сыҡтымы - ил эйә.
- Алдашма, ике йөҙләләнмә - ихтирамһыҙ булырһың; әрләшһәң - ҡәҙерһеҙгә әйләнерһең.
- Кешенән сүп эҙләмә, күҙеңдәгеһен алып ташла.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Тулы һыулы, ярһыу даръяға әүерелгәнсе, йылғалар ниндәй сығанаҡтан көс ала? Әлбиттә, инеш башы - мәңге тере, шиңмәҫ шишмәләрҙән. Кеше ғүмерҙәре лә шуға оҡшаш түгелме? Киң күңелле, бай тойғоло, изгелекле һәм илһөйәр шәхес булып етешкәнсе, кескәй генә сабый йөрәге мәңгелек тереһыуыбыҙ - халҡыбыҙҙың рухи инештәренән һут алып, уның ауыҙ-тел ижады хазиналары менән күңелен үҫтереп, байытып сыға тормош юлына. Әгәр бына ошондай хазина артмаҡлап сыға икән бала тормош юлына - ул һәр саҡ тоғро юлда, тип ныҡлы ышанырға була, сөнки тап ана шул башҡорт әкиәттәрендәге изгелек сабый күңеленә һеңә, аңын - зирәклек, йөрәген иле һәм халҡы хаҡына бөйөк маҡсат биләйәсәк.**



# ЙӘШӘГӘН, ТИ, ИЗГЕЛЕК...

## йәки "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы тураһында

Маҡсатына илткән юлында аң-белемде, тапҡырлыҡ һәм зирәклекте, көс-ҡеүәтте юлдаш иткәндә генә уңышҡа өлгәшеп буласағын аңғарта беҙҙең әкиәттәр балаға, сөнки уңыш үҙенән-үҙе генә килмәй, ни теләһәң, ни ҡушһаң - шуны биреүсе алтын балыҡ та, суртандар ҙа юҡ беҙҙең әкиәттәрҙә. Бала күңеле әкиәттәребеҙ аша иң тәүҙә ана шуға ныҡлап төшөнөргә тейештер, күрәһең. Тик шуныһы йәл: балалар хәҙер әкиәттәрҙе китаптарҙан түгел, күбеһенсә телевидение "һыйлаған" сит ил мультиктары, интернет аша ҡарап таныша. Шуға ла, ниндәй әкиәттәр беләһең, тигән һорауға күбеһе: "Үрмәксе-кеше", "Вуди һәм уның дуҫтары" һәм башҡа шуның кеүек фантастик телесериал-мажаралар исемдәрен теҙеп һанай башлай. Ә халыҡ әкиәттәренән бер нисәүһен өлкән класс уҡыусылары ғына атай алалыр, моғайын. Элек, совет осоронда, беҙ уҡып үҫкән матур-матур әкиәт китаптарын хәҙер китапханаларҙың да бөтәһендә лә осрата алмаҫһың. Ә баш ҡалабыҙҙағы "Планета", "Эдвис" кеүек эре-эре китап магазиндарында рус һәм башҡа халыҡтар әкиәттәрен табырға булһа ла, башҡорт халыҡ әкиәттәрен көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә юҡ. Уҡыусы балалар туған тел дәреслегендәге әкиәттәр менән генә хушһына, буғай. Һәр хәлдә, әңгәмәләшкән саҡта уларҙың уҡыу программаһынан бер аҙым да ситкә сығып китә алмауҙары, әкиәт һандыҡтарының бик һай булыуы күренә.

Һорау ғына түгел, проблема тыуа: нисек итеп бала күңелендәге бушлыҡты тултырырға? Бөтөн изге нәмә әкиәттән башлана, тибеҙ. Нисек итеп балаларҙы ошо тылсым донъяһына ылыҡтырырға? Әлбиттә, иң тәү башлап балаға әкиәтте ата-әсә, өләсәй-ҡартәсәйҙәр һөйләргә, ҡыҙыҡһыныу уятырға тейеш. Балалы өйҙә әкиәт яңғырамауын, сағыу, төҫлө һүрәтле әкиәт китаптары булмауын күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Ә инде ундай йорттар бар икән, унда үҫкән балаларҙан кем килеп сығырын күҙ алдына килтереүе шулай уҡ ҡыйын. Ана шуға күрә лә 2010 йылда йәш артист Алтынай Ибраһимова-Бурина башланғысы менән тормошҡа ашырыла башлаған "Һаумы, һаумы, әкиәт!" проекты баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Уның мөһимлеген тормош үҙе раҫлай килә. Әле бына ошо көндәрҙә генә Өфөлә донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсы Гала-туры булып үтте. Конкурс барышында барлығы 700-ҙән ашыу йәш әкиәт һөйләүсе ҡатнашты, тинеләр. Гала-турға иһә ана шуларҙың иң оҫталары, башҡорт телендә матур итеп, тасуири һәм иркен һөйләшеүсе балалар һайлап алынғанлығы күренеп тора ине. Тамашасыларҙың иң яратып тыңлағаны, шулай ҙа, әкиәт оҫталарының иң кескәйҙәре булғандыр. Мәктәпкәсә йәштәгеләр араһында төп еңеүселәр Киров районы 40-сы балалар баҡсаһынан Уралиә Толомбаева (1-се урын), Дим районы 75-се балалар баҡсаһынан Айгиз Исхаков (2-се), Орджоникидзе районы 22-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Айгөл Сиражетдинова (3-сө) булһа, Гран-при Октябрь районы 308-се балалар баҡсаһынан Сабина Ғибаҙуллинаға эләкте. Сабина - "Ала ҡаҙ", ә Уралиә "Әтәс менән ике сыҫҡан" әкиәттәрен тағы бер һөйләп кинәндерҙе тамашасыны. Башланғыс класс уҡыусылары ла кескәйҙәрҙән бер ҙә ҡалышып торғоһо килмәне. Улар араһында Гран-при Ленин районы 24-се урта мәктәптең 4-се класс уҡыусыһы Рушана Ноғайғолова бәхетенә яҙҙы. Ә өлкән төркөм уҡыусылар араһында төп еңеүсе урындарҙың өсәүһен дә 7-се класс ҡыҙҙары яуланы: Октябрь районы 42-се лицейҙан Алина Әхмәтова (1-се урын), Киров районы М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһынан Ынйы Ирғәлина (2-се) һәм Совет районының 27-се мәктәбенән Лилиә Әхмәтйәнова (3-сө).

Ә Гран-при кемдә тип уйлайһығыҙ? Ышанмаҫһығыҙ ҙа, моғайын! Үҙем күреп, һөйләгәнен үҙ ҡолаҡтарым менән ишетмәгән булһам, мин дә, билләһи, ышанмаҫ инем: "Тирмәкәй" тигән рус халыҡ әкиәтен саф башҡорт телендә һөйләп, иң юғары баһаны Ленин районы 35-се урта мәктәбенең 7-се класс уҡыусыһы - рус ҡыҙы Арина Федорова яуланы! Әйткәндәй, беҙ уның менән кисә башланыр алдынан уҡ танышҡайныҡ инде: алғы рәткә үтеп, урын алғас, эргәмдәге ҡыҙыҡай менән һөйләшеп киттек. Әсәһе - тегенсе Татьяна Викторовна менән бергәләп килгән улар. Әкиәттәр яратам, уларҙы сәхнәләштерергә хыялланам, ти ҡыҙыҡай. Мәктәпте тамамлағас, режиссер һөнәренә уҡығым килә, тип һөйләп ултырҙы үҙе хаҡында. Мәктәптә башҡорт телен яратып өйрәнеүе, башҡорт теле уҡытыусыһын бик ихтирам итеүе хаҡында ла белдем. Кисәне алып барыусы юғары награда яулаусының исем-фамилияһын әйтеп, сәхнәгә саҡырғас ҡына мин уның эргәмдә ултырған әлеге ҡыҙыҡай икәнлегенә төшөндөм. Үәт, Арина, башҡорт ҡыҙҙарына оҡшап, баҫалҡылығын да күрһәтте, күптәрҙең танауына сиртте! Ә яратҡан уҡытыусыһы уның Эльза Юрис ҡыҙы Толомбаева булып сыҡты. Ул да уҡыусыһы артынан сәхнәгә күтәрелеп, конкурс наградаһы алып төштө. Шундай уҡ хөрмәткә "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсына еңеүсе балалар әҙерләгән бөтә тәрбиәселәр һәм башҡорт теле уҡытыусылары ла лайыҡ булды. Өфө мәктәптәренең әкиәттәр сәхнәләштереп күрһәткән фольклор коллективтары ла баһаланды. Ф. Мостафина исемендәге 20-се гимназия уҡыусылары "Тылсымлы ҡурай" әкиәтен сәхнәләштереп, ҙур баһаға лайыҡ булды.

Бер бәләкәй генә мәҡәләлә ошонда йыйылған талантлы, береһенән-береһе матур, һөймәлекле кескәй генә әкиәт оҫталары хаҡында яҙып та, исемдәрен булһа ла әйтеп сығыуы ла мөмкин түгел шул, бик йәл... Ә бит был конкурс сығыштарын видеояҙмаға төшөрөп алып, телевидение аша бөтөн республикаға күрһәтергә мөмкин булыр ине бына! Ниндәй фәһемле, матур , иң мөһиме - бына тигән әҙер материал әрәм була. Икенсе фекер - дәртләндереү саралары хаҡында. Балаларға бүләккә йылдың-йылы уларҙың үҙҙәре ҙурлыҡ дәүмәлдәге йомшаҡ уйынсыҡтар тапшырыла. Бүләктең "тешен" тикшермәйҙәр, тиһәләр ҙә, бала - бала инде ул. Берәүһенең сығып барғанда "Кәрәкмәй, минең бындай уйынсыҡ өй тулы!" тип иламһырағаны ла ишетелеп ҡалды ҡолаҡҡа. Ысынлап та, бүләктәр замансараҡ булһа, балалар тағы ла дәртләнеберәк әҙерләнер ине конкурсҡа. Ә, ғөмүмән, "Һаумы, һаумы, әкиәт!"конкурсын, уның бик тә кәрәкле һәм ваҡытлы, йоғонтоло, ҡыҙыҡлы тәрбиәүи сара булыуын иҫтә тотоп, уны республика күләменә сығарыу ҙа яҙыҡ булмаҫ ине, тигән уй ҡалды.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Берлинда ҡалған

70 йәшлек Шәрифйән Сынбулатов ағай өр-яңы "Днепр" мотоциклы һатып алғас, үҙ йомошо менән көн дә район үҙәге Аҡъярға барып сыға торғайны. Бер көндө урамда Шәрифйән ағайҙы юл хәүефһеҙлеге инспекторы туҡтата һәм документтарын күрһәтеүҙе һорай. Документтарын тикшергән арала уның каска урынына түбәтәй кейгәнен күреп ҡала:

- Олатай, ниңә каска киймәгәнһегеҙ?- тип һорай.

- Касканы биш йыл буйы һалмай кейеп йөрөнөм инде, улым. 1945 йылдың 9 майында Берлинды алғас, шатлығыбыҙҙан һауаға сөйгәйнек, шунда ҡалдырып киткәнмен.

- Мә, документтарығыҙ, хәйерле юл, олатай, - тип оҙатып ҡалған инспектор ағайҙың был тапҡырлығына һоҡланып.

### Биш кәбән

Элек райкомда мал ҡышлатыу мәсьәләһе буйынса йыш ҡына колхоз рәйестәре менән йыйылыш үткәрелеп торған. Ике-өс хужалыҡтың мал аҙығы бөтөүе сәбәпле, ҡайһы хужалыҡта күпме бесән барлығын белеү ниәтендә һәр бер рәйестән белешмә алғандар. Иң һуңғы булып "Игенсе" колхозы сығыш яһаған. Уның да мал аҙығы бөткән булған, ләкин башҡалар алдында һыр бирмәҫ өсөн рәйес: "Минең биш кәбәнем бар", - тип әйткән. Райком секретары был яуапҡа бик ҡәнәғәт булған һәм иртәгәһен барып күрәсәген әйткән.

Райком секретары килеп: "Йә, иптәш Сынбулатов, кәбәндәреңде күрһәт әле", - тигәс, рәйес ҡарҙан асылған биш тау башын күрһәткән, ти. Хужа аптырап торғандан һуң, бер ни ҙә өндәшмәй, машинаһына ултырып ҡайтып киткән. Шул йылдарҙан һуң яҙ айҙарында иң тәүҙә ҡарҙан асылған тау баштарын "биш кәбән" тип исемләп йөрөтөр булғандар.

### Үәт тәк корова...

Колхоз рәйесе фермаға килгәс, эштең торошо менән танышып сыға. Колхоздың өлкән йәштәге алдынғы һауыусыһы Сәғирә апай һауған һөттөң 15 литрға кәмеүенә иғтибар итә. Ферма мөдире лә уның сәбәбен аңлата алмай. Киске һауын ваҡытында икәүләп Сәғирә апай эшләгән һарайға баралар һәм һөт ни өсөн кәмеүенең сәбәбен һорашалар. Сәғирә апайыбыҙ, русса яҡшылап белмәгәс, нисек аңлатырға аптырап торғанда, тулы бер күнәк һөтөн колхоз рәйесе яғына тибеп ырғытып: "Үәт тәк корова", - тигән. Рәйес: "Вот теперь я вас понял", - тип сығып киткән.

### Три дня не поил...

Ғилмияза апай фермала оҙаҡ йылдар быҙауҙар тәрбиәләүҙә эшләне. Көн режимын боҙмай, үҙ ваҡытында ашатып-эсереү һөҙөмтәһендә быҙауҙары ла һау-сәләмәт булып үҫә, артым алыу буйынса ла ай һайын юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә. Фермала ай аҙағында малсылар йыйылышы үткәргән ваҡытта колхоздың баш зоотехнигы (ул урыҫ була) Ғилмияза апайҙы ла маҡтап телгә алып:

- Быҙауҙарға көнөнә нисә мәртәбә һыу эсерәһең?- тип һораған. "Һыуҙы көнөнә өс мәртәбә эсерәм", тип әйтәһе урынға, Ғилмияза апай:

- Три дня не поил, - тип әйтеп ысҡындырған.

Баш зоотехник аптырашта ҡалған һәм ферма мөдиренә ҡарап:

- Был нисек була инде?- тигән.

- Ул яңылыш аңлатты,- тигәс, бөтә малсылар ҙа рәхәтләнеп көлгән.

**Марат МӘМБӘТОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Хәйбулла районы**
**Әүбәкер ауылы.**

## ИНТЕРНЕТТАН



# РЕКЛАМАҒА...

## ышанмаҫҡамы?

■ Психологтар асыҡлауынса, ижади ҡараш талап ителгән мәсьәләләр йөйәү йөрөгәндә тиҙерәк хәл ителә. Стэнфорд университеты ғалимдары билдәләүенсә, тышта йөйәү йөрөү генә түгел, ә бүлмәне арҡыры-буйға йөрөп сығыу ҙа фекерләү процесын яҡшырта. Тикшеренеүҙәрҙә 176 студент ҡатнашҡан, улар барыһы ла бер нисә ижади мәсьәләне үтәп сығырға тейеш булған. Уларҙың ҡайһы берҙәре тик ултырған, икенселәре тәбиғәткә сыҡҡан, өсөнсөләре бүлмә буйлап атлап йөрөгән. Өсөнсө төркөмдәге студенттар креатив мәсьәләрҙе башҡаларға ҡарағанда 60 процентҡа яҡшыраҡ үтәгән. Психологтар белдереүенсә, был ысул тап креатив ҡараш талап ителгәндә уңай, ә конкрет логик мәсьәләләрҙе анализлау өсөн иғтибар талап ителә.

■ Сәстәрҙең иртә салланыуында эш урынындағы стрестар һәм башҡа сәбәптәр түгел, ә төрлө диеталар һәм итле аҙыҡты аҙ ашау гәйепле. Сәстең иртә салланыуының иң киң таралған сәбәбе - тирозин аҡһымының етешмәүе. Ул башлыса ит һәм майҙа осрай, шуға ла диетала ултырыусылар һәм ит ашамаусылар быға йышыраҡ дусар була. Тулы булмаған рационда тирозин һәм баҡыр етешмәй, ә тап улар буяусы пигменттар барлыҡҡа килеүенә яуап бирә.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, машинаны хәүефле йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда депрессия менән йышыраҡ яфалана. Быға тиклем психик стресс, хәүеф тойғоһо, депрессия һәм алкоголизмдың бер-береһе менән бәйле булыуы дәлилләнгән инде. Хәҙер ғалимдар кеше кисергән стрестың һәм уның машина йөрөткәндә даими рәүештә үҙенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуы араһында бәйләнеш эҙләй. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен инҡар итеүселәр араһында стресс кимәле ысынлап та юғарыраҡ була. Был эффект бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙа күҙәтелә. Тимәк, машина руле лә кешенең психикаһына ҙур зыян килтерә ала, ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, доктор Скотт-Паркер.

■ Швеция ғалимдары асыҡлауынса, туйғансы йоҡламау организмда матдәләр алышыныуын тотҡарлай. Быға тиклем йоҡо туймауҙың артыҡ ауырлыҡҡа килтереүен асығыу гормоны кимәле күтәрелеүгә бәйләп аңлаталар ине. Яңы тикшеренеүҙәр раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ төндә йоҡо туймау һөҙөмтәһендә матдәләр алышыныуы тотҡарланыуына бәйле икән. Экспертар фекеренсә, күберәк йоҡлап, артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоп була.

## ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Идеаль дәүләт ҡоролошо, бөтә яҡлап өлгө булырҙай кешеләр тормошон төҙөү тураһында хыялланыусылар һәр быуатта ла булған. Бөйөк грек философы Платон, итальян яҙыусыһы Томмазо Кампанелла, инглиз яҙыусылары Сэмюэль Батлер һәм Герберт Уэллс, рус яҙыусыһы Николай Чернышевский һ.б. үҙҙәренең хеҙмәттәрендә һәр яҡлап яҡшы йәмғиәт йәшәйешен тасуирлай. Башҡорт яҙыусылары тарафынан "утопия" жанрында ижад ителгән әҫәрҙәр юҡ, әммә ошо көндәрҙә Әбйәлил районы Рәхмәт ауылына мәктәптәренең 150 йыллығын билдәләргә һәм яңы төҙөлгән мәсетте асыу тантанаһына барыусылар башҡорт утопияһында тасуирланырға тейеш тормоштоң ниндәй икәнлеген үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтты. 2013 йылдағы "Айыҡ ауыл" конкурсы еңеүсеһе Рәхмәт ауылынан алып ҡайтҡан тәьҫораттарҙы һеҙҙең менән дә бүлешәйек әле, ҡәҙерле гәзит уҡыусылар!**

# ӨЛГӨЛӨ БАШҠОРТ АУЫЛЫ...

## хыялда ғына түгел

### Башҡорт йорто

Рәхмәт ауылына халыҡ йәкшәмбе көнө үк алыҫ араларҙы яҡынайтып, төрлө тарафтарҙан ағыла башланы. Уҙғарыласаҡ тантаналарға шаһит булырға теләүселәрҙе ауыл осонда уҡ ҡунаҡсыл, киң күңелле хужабикә, Рәхмәт ауыл клубы мөдире Идия Ғәлимова ҡаршы алды. Идия Миҙхәт ҡыҙы һәр кемде өйөнә саҡырып, башҡорт милли аш-һыуҙарынан һыйлап торған өҫтәл әҙерләп, мунса яғып, алыҫ юлдан арып килеүселәргә ял итеү мөмкинлеге бирҙе. Икенсе көнөнә иһә, ауылда уҙғарыласаҡ тантаналы сараларҙа ҡатнашыусы Төркиә, Әзербайжан, Алтай тарафтарынан һәм республикабыҙҙың башҡа төбәктәренән килгән мәртәбәле ҡунаҡтар һәм ошо ауыл ҡыҙы, РФ Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова ауыл урамдары буйлап йөрөп, иркенләп халыҡ менән аралашты. Рәхмәт өс яҡлап тауҙар уратып алған киң ҡалҡыулыкта теҙелешеп ултырған күркәм, тыштан семәрләп эшләнгән ҙур йортло, киң урамлы ысын башҡорт ауылы булып сыҡты. Ҡала шарттарына күнегеп бөткән ҡунаҡтарҙың күҙенә тәү сиратта ауылдың киң урамдарында ла, өйҙәр алдында ла бер ниндәй ҡый күренмәүе сағылды. Ҡый ташлау өсөн махсус һауыттар булмаһа ла, урам буйында сүп-сар, хатта тәмәке төпсөктәре лә юҡ. Ауыл Советы депутаты Исрафил Йәнсәйетов һөйләүенсә, Рәхмәт тураһында тәүге мәғлүмәт 1756 йылда теркәлә, ул саҡта ауыл Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе Күбәләк улысына ҡарай. Бында 12 йортта 104 кеше йәшәй, урын "Рәхмәт йорто" тип йөрөтөлә. Бөгөнгө көндә Рәхмәт алты урамлы ҙур ауыл булып үҫеп еткән. Халыҡ ҡаҡлы рәүештә ата-бабаларының тарихи үткәне менән ғорурланып, күркәм урамдарына ошо ерҙән сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәр исемдәрен биргән. Үҙәк урам "Сибай кантон" исемен йөрөтә. Ауылдаштар Шәйәхмәт Утарбай улы Сибаевтың 1858-1864 йылдарҙа 6-сы башҡорт кантоны башлығы вазифаһын башҡарғанда Рәхмәтте төбәк итеүе тураһында ғорурланып иҫкә ала. "Сибай" халыҡ йырын ижад иттереүсе кантон халыҡтың хәлен яҡшыртыу, уны үҫтереү өсөн күп көс һала. Ауылдың башҡа урамдары "Старшина Ғүмәров", "Зәки Хәсәнов", "Тыныслыҡ", "Йәштәр", "Дуҫлыҡ", "Мәктәп" урамы тип исемләнгән. Экскурсия барышында "Һыуһар" ҡойоһон күреп, уның шифалы һыуын тәмләп ҡарау мөмкинлеге лә булды. Ун ике ерҙән урғылып сыҡҡан һыу бер урынға килеп тоташҡан ерҙе ауыл халҡы малтыуар аяғынан ҡурсалап, матур итеп кәртәләп ҡуйған. Бәхтиһән, был һыу ҙа ябай түгел, әкиәттәрҙә телгә алынған тере шишмәләй сихри көскә эйә: ул боғаҡ шешеү, ангина кеүек ауырыуҙарҙан дауа икән. Рәхмәт ауылының тәҙөк өйҙәре, шифалы һыуҙарын ҡарап йөрөгән арала, ҡунаҡсыл ағинәйҙәр Меңәүәрә һәм Хазина Әхмәҙиевалар, Рәшиҙә Хәйбуллина, Ҡафида Ғәлимова килендәре менән бергәләп өй алдына өҫтәлдәр ҡуйып, унда буҙа, башҡорт аштары теҙә һалып ҡуйған. 86 йәшен тултырыусы иң оло ағинәй Нурлығаян Мансурова йорто эргәһенә үҙенең ҡул эштәре, бәйләмдәре, һуҡҡан төҫлө балаҫтарынан күҙҙең яуын алырлыҡ күргәҙмә эшләгән. Һәр береһе эргәһендә туҡтап, ризыҡтарынан ауыҙ итеп китеүҙән башҡа сара ҡалманы ҡунаҡтарға...

Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр тиер, ти халыҡ. Рәхмәт ауылы халҡы һәр эштә бер-береһенә асыҡ сырайлы, яҡшы мөғәмәләлә, маҡтаулы һуҙле. Ауылдаштар сәмле, дәртле генә түгел, "Айыҡ ауыл" конкурсы еңеүселәре лә. Ун йыл дауамында әҙерләнеп, 2013 йылда конкурста ҡатнашырға баҙнат итеүсе рәхмәттәр бөгөн спиртлы эсемлектәрҙе ауыҙына ла алмай, урындағы магазиндарға һатыуға ла сығартмай. Ауыл ерендә эшһеҙлек, эскелек, аҙғынлыҡты еңерлек, илде айыҡтырыр сара таба алмай йонсоғанда, Рәхмәт ауылын матур өлгө итеп килтерергә генә ҡала. Бында хатта ауыл ир-аттарын Себер тарафтарына ебәрмәү сараһын да тапҡандар: биш төҙөлөш бригадаһына берләшеп, яҡын-тирәләге ҡалаларға йөрөп эшләй рәхмәттәр. Һәр







***✓ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға арналған обелиск тирәләй ағас ултыртып, матур бер аллея булдырғандар, яңы балалар баҡсаһы асылған, ике ҡатлы урта белем биреү мәктәбе балалар тауышынан шау-гөр килеп тора.***

йорт хужаһы ихатаһында кәм тигәндә бер "Жигули", бер сит ил автомобиле, бер трактор йәки йөк машинаһы тора. Ауылдаштар тик шәхси мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртып ҡалмай. Бына яңыраҡ ҡына бөтә ауыл менән Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға арналған обелиск тирәләй ағас ултыртып, матур бер аллея булдырғандар, яңы балалар баҡсаһы асылған, ике ҡатлы урта белем биреү мәктәбе бинаһы шат балалар тауышынан шау-гөр килеп тора, ауыл клубы иҫке йортта урынлашыуына ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт мәҙәни саралар өсөн асыҡ. Бөтә яҡлап уңған рәхмәттәрҙең ауылы менән яҡындан танышып сыҡҡас, ҡунаҡтар түңәрәк юбилейын билдәләгән мәктәпкә юлланды.

## Белем йорто

Рәхмәт ауылында тәүге тапҡыр белем биреү усағы асылыуға - 150 йыл. Был турала Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы үҙ сығышында тулы мәғлүмәт еткерҙе: "1864 йылда кантон башлығы Шәйәхмәт Сибаев эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Верхнеурал өйәҙендә өс рус-башҡорт мәктәбе асыла. Уларҙың береһе - Рәхмәт ауылында, икенсеһе - Баймаҡ районының Темәс, өсөнсөһө Учалы районының Илтабан ауылдарында була. Рәхмәт ауылындағы мәктәпкә тәүге уҡытыусы итеп Верхнеурал ҡалаһынан дворянин Ростислав Герасимов тәғәйенләнә. Ул башҡорт балаларына рус теле һәм грамматикаһы буйынса белем бирә. Артабан хатта арифметика, геометрия, география кеүек фәндәр ҙә уҡытыла башлай. Мәктәптә ислам дине ҡанундарын указлы мулла өйрәтә. Урыҫлаштырыу өсөн асылған мәктәпкә йыл да утыҙлап бала уҡырға алына".

Ошо осорҙан алып илдәге үҙгәрештәр, тормош ауырлыҡтарына ҡарамаҫтан, Рәхмәт ауылында белем усағы эше һүнмәгән. Колхозлаштырыу, кулактарҙы бөтөрөү сәйәсәте барған йылдарҙа ауылдағы ҡалай менән ябылған, урыҫ ҡапҡалы берҙән-бер йорттоң хужаһы Ғаззалов Вәисте һөргөнгә ебәреп, уның дүрт бүлмәле өйөн мәктәп итәләр. Был мәктәптә уҡытыу эше 1974 йылға тиклем алып барыла. Рәхмәт ауылы халҡы хәтерендә 1974 йылдың ноябрь айында яңы типтағы башланғыс мәктәпкә уҡырға күсеү шатлығы бөгөнгәсә һаҡлана. Ул осорҙа дүрт класта бөтәһе ҡырҡ ике бала белем ала. Бөгөн Рәхмәт ауылы балалары ике ҡатлы, бөтә уңайлыҡтар булған мәктәптә уҡый. Белем усағы асылыуға 150 йыл тулыу айҡанлы йыйылған халыҡ араһында был ауылды икенсе тапҡыр килеп күреү бәхете кисергән Исмәт Бинәр ҡан-ҡәрҙәштәренә әйтер һүҙҙәрен былай тип еткерҙе: "Мин Төркиәнең Истамбул университетында белем алыусы студенттарға башҡорт телен уҡытам. "Башҡорт теле грамматикаһы" тигән уҡытыу әсбабы яҙҙым. Әлеге көндә китабым Төркиәнең 500-гә яҡын белем биреү учреждениеларына таратылды, Америкаyның Принстон университетына ебәрелде, Ҡытайҙан да үтенес килде, тиҙҙән улар ҙа башҡорт теле менән ошо әсбап аша таныша аласаҡ. Башҡорт телен өйрәнеүемә бер ҡасан да үкенмәнем, уның юғалып ҡалырына ышанмайым. Әгәр ҙә һеҙ үҙегеҙ башҡорт телен яратып, өйрәнеп, уны үҫтереү буйынса эшләһәгеҙ, тел бер ҡасан да юғалмаҫ".

## Иман йорто

Мәктәп бинаһында ойошторолған матур саранан һуң, бар халыҡ яңы төҙөлгән мәсетте асыу тантанаһына юлланды. Иман йортон, фекерҙәштәрен килеп күреү теләгендә күрше ауылдарҙан, район үҙәгенән, Учалы районының Зәйнулла ишан мәсетенән, алыҫ баш ҡаланан төрлө дин әһелдәре йыйылғайны. Салауат ауылынан килгән Рафиҡ хәҙрәт Шәйәхмәтов әйтеүенсә, ул быға тиклем Рәхмәт ауылында йәшәгән ҡәрҙәштәрҙең тулыһынса эскелектән арыныуы тураһында хәбәрҙар булмаған. "Мин, берҙән, бындағы айыҡ донъя менән осрашыуыма сикһеҙ шатмын, - тип тәьҫораттары менән бүлеште ул. - Икенсенән, төрлө яҡтарҙан йыйылған халыҡтың күплеген иҫәпкә алғанда, кешеләр күңелендә барыбер ҙә ниндәйҙер бер дәрт, киләсәккә ышаныс, иман нуры бар. Халыҡ иманға ҡайта..."

"Аҡмәсет" тип исемләнгән мәсетте асыу тантанаһында Рәсәйҙең Европа өлөшө мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин хәҙрәт вәғәз һөйләне: "Былтыр Башҡортостанда 52 мәсет асылды. Иман ҡайтһын тиһәк тә, иман һүнгәне юҡ, Аллаға шөкөр... Харам - ул эскелек йә суҫҡа ите, урлашыу ғына түгел. Бер нәмәне әрәм итһәң, исраф була. Исраф та харам. Бына тиғән икмәкте юлға ташланың, йә кейерлек кейемде сүплеккә бәрҙең - был да харам. Шуның кеүек, ни тиклем тырышып, күпме мал тотоп һалған мәсетте бикләп ҡуйыу ҙа харам була. Был мәсет һәр ваҡыт асыҡ булырға тейеш",- тине мөфтөй хәҙрәт. Хоҙай йорто, тип, бәндәләр мәсеткә инеп йөрөүҙән тартынһа, тәләфләнгән хеҙмәт харамға әйләнәсәген дә аңғартты ул.

Рәхмәт ауылы халҡын Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румиль Аҙнабаев, Әбйәлил районы хакимиәте башлығы Рим Сыңғыҙов, мәсет төҙөтөүгә матди ярҙам күрһәтеүсе Фирҙәүес Хисаметдинова, мәсеттең архитекторы Асҡар бей, Исмәт Бинәр ҙә тәбрикләне. Күп осраҡта, тейешле кейемем юҡ, доғалар белмәйем, тип, мәсет тупһаһын ашатлап инергә ҡыймаған йәштәрҙе төрлөсә тыйыуҙар менән сикләмәҫкә, киреһенсә, мәсеткә ылыҡтырырға кәрәклеген һәр кем һыҙыҡ өҫтөнә алды. Иң изге теләктәр, яҡшы ниәттәр менән асылған "Аҡмәсет" Рәхмәт ауылының һәр кешеһе, килгән-киткәндәр өсөн ышыҡ булыр, күңелдәренә иман нуры сәсеп торор, тигән өмөт уянды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәхмәт ауылын ҡарап йөрөгән арала Әзербайжандың милли Фәндәр академияһы ғалимы Имаш Гаджиев былай тигәйне: "Бынан 150 йыл элек ошондай төпкөл ауылда рус-башҡорт мәктәбе асылыуы бик аптырарлыҡ хәл. Был ваҡиға башҡорт милләтенең бөтөн асылын сағылдыра, халыҡ бер ваҡытта ла үҙ милләтенә ҡарата битараф булмаған, киләсәктәрен ҡайғыртып йәшәгән. Бөгөн дә мин бында киләсәк быуынды, алдағы көндәрен хәстәрләп, уртаҡ мәнфәғәт өсөн янып йәшәүсе кешеләрҙе күрҙем". Ысынлап та, тотош халыҡтар битарафлыҡ һаҙлығына батып барған әлеге заманда Рәхмәт ауылы халҡының энтузиазмын, уларҙың тормош дилбегәһен үҙ ҡулдарына алып йәшәүен күреү күптәрҙе һиҫкәндерҙе шул. Бәхтиһәң, идеаль башҡорт ауылы утопия түгел, барыһы ла үҙ ҡулыбыҙҙа икән, милләттәштәр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**










УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Бер нәмәгә генә иғтибар туплау - ул ни тиклем асығыраҡ, һеҙ шул тиклем аныҡыраҡ эшмәкәрлек итәһегеҙ, тигән һүҙ.**

Ғәмәлдә йоғонтоло лидер булыу өсөн талап ителгән иғтибар туплай алыу һәләтенә эйә булыу өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк? Бында төп урынды өҫтөнлөктәр һәм иғтибарҙы туплай белеү алып тора. Үҙенә өҫтөнлөктәр билдәләгән, әммә тейешле иғтибар туплай белмәгән лидер нимә эшләргә икәнлеген белә, әммә бер ваҡытта ла быны эшләмәй. Әгәр ул иғтибар туплай белеп тә, өҫтөнлөк ҡуя белмәһә, бик күп артыҡ хәрәкәттәр яһай, ләкин алға китеш кенә булмаясаҡ. Уға ике сифат та хас булғанда ғына ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшеү өсөн ҡеүәт барлыҡҡа килә.

Йыш ҡына етәксе урындарҙа бәләкәй эштәрҙә лә бөйөк оҫталыҡ хас булған кешеләр менән осрашырға мөмкин. Үҙеңдә бындай сиафттарҙы булдырыу мотлаҡ түгел. Иң мөһиме шунда: ваҡытығыҙҙы һәм энергияғыҙҙы нисек итеп туплай белергә тейешһегеҙ? Бында түбәндәге принциптарға таянырға кәрәк:

● **70 процент ресурстарығыҙҙы көслө сифаттарығыҙға йүнәлтегеҙ.** Үҙҙәренең ҡеүәтен тулыһынса файҙалана алған йоғонтоло лидерҙар бик яҡшы килеп сыҡмағанына ҡарағанда, уңышлы башҡарған эштәренә иғтибар йүнәлтә. Лидерлыҡ мәсьәләләре буйынса билдәле эксперт Питер Друкер: "Бөйөк сер кешеләрҙең теге йәки был эште ни өсөн насар башҡарыуына түгел, ә ни өсөн уларҙың ҡайһы бер эштәрҙе яҡшы эшләүенә йәшеренгән. Һәр ерҙә һәм универсаль характерға эйә берҙән-бер кешелек сифаты - компетентһыҙлыҡ. Юғары оҫталыҡ һәр ваҡыт һирәк осрай! Бер кем дә, бер ваҡытта ла, мәҫәлән, бөйөк скрипкасы Яша Хейфец, моғайын да, торбала ныҡ яҡшы уйнай беләлер, тип фаразламаған". Уңыш ҡаҙаныу өсөн көслө яҡтарығыҙға иғтибар туплағыҙ һәм уларҙы үҫтерегеҙ. Тап ошоға үҙегеҙҙең төп ваҡытығыҙҙы, энергияғыҙҙы һәм ресурстарығыҙҙы бағышларға тейешһегеҙ.

● **25 процент ресурстарығыҙҙы яңы нәмәләргә йүнәлтегеҙ.** Үҫеш үҙгәрештәргә тиң. Әгәр яҡшыраҡ булырға теләһәгеҙ, тормошоғоҙға һәр саҡ үҙгәрештәр индерегеҙ һәм яңы нәмәгә өйрәнегеҙ. Был бығаса өйрәнелмәгән киңлектәрҙе буйһондороуға әҙерлекте белдерә. Әгәр үҙегеҙ көслө булған өлкәгә иғтибар бүлһәгеҙ, мотлаҡ лидер буларак үҫерһегеҙ. Онотмағыҙ: әгәр лидер буларак үҫергә теләһәгеҙ, үҫеш буйынса ла алда барырға тейешһегеҙ.

● **Иғтибарығыҙҙың 5 процентын көсһөҙ яҡтарығыҙға бүлегеҙ.** Бер кем дә үҙен көсһөҙ итеп тойған өлкәләрҙә эшләүҙән тулыһынса азат итә алмай. Ләкин уларҙы мөмкин ҡәҙәр кәметеү зарур һәм лидерҙар быны үҙ вәкәләттәрен башҡаларға йөкмәтеү аша эшләй.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 26 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Балабол". Комедийный сериал. 9-10-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10, 03.05 "Буч Кэссиди и Санденс Кид". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
03.20 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Большой африканский разлом". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+)
17.00 "Вести".
17.35 "Вести-Башкортостан".
17.55 "Вести. Дежурная часть".
18.10 "Прямой эфир" (12+).
19.25 "Вести-Башкортостан".
19.50 Футбол. Товарищеский матч. Россия - Словакия. Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.
21.55 "Вести".
22.50 "Майор полиции". Детективный сериал. 1-4 серии (16+).
02.30 "Девчата" (16+).
03.10 "Люди и манекены". Комедийный сериал.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Йомабай Үтәшев
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". Шәһәрғәзи сәсән (6+)
15.00 "Ағыла моң". Рәдик Ефремов
21.00 "20 йыл сәхнәлә". Лилиә Ишемйәрова (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 Новости недели.**
**11.45, 02.00 "Ай кызы". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 06.00 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Көндәлек. Караидельский район" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости.**
